*✓Туған телен белмәгән кеше халҡының рухи байлығына ла эйә була алмай. Үҙ халҡының рухи байлығына эйә булмаһа, башҡаларҙыҡын да ҡабул итә алмай.*

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

22 - 28 ҒИНУАР (ҺЫУЫҒАЙ) 2011 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru   2002 йылдан башлап сыға   Һатыуҙа хаҡы ирекле   №4 (422)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Беҙҙең тарих - көрәш тарихы**

Һүҙ - Марат Ҡолшәрипов тураһында



2

**"Олуғ зат нәсәле беҙ"-**

шулай ти Зәйнулла ишан бүләсәре Сәүҙә инәй



8-9

**Нимә тип йырлаһаң...**

шул тормошоңда бойомға аша



11

**Тыйғандарын һөйһөнмәһәк...**

үҙебеҙҙе үҙебеҙ тыяйыҡ



15

14 ТВ-программа

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Был донъяла һәр кем үҙенең тоҡомон һәм эшен дауам итеүселәр ҡалдырырға тейеш. Быны эшләй алмағандарҙы нисек баһалайһығыҙ?

*Әхтәм АБУШАХМАНОВ, Башҡортостандың халыҡ артисы:* Нимә ул тоҡом? Тоҡом - ул киләсәк. Тоҡомдо онотоу - киләсәкте онотоу. Тоҡомдо дауам итеү хатта хайуандарҙа инстинкт кимәлендә нығынған. Тимәк, киләсәге булмаған кешенең бөгөнгөһөнөң һәм, ғөмүмән, йәшәүенең мәғәнәһе юҡ. Үҙ эшеңде дауам иттереүсе әҙерләп ҡалдырыу ҙа шул уҡ тоҡом ҡалдырыуға тиң яуаплылыҡ талап итә кешенән. Үҙ тоҡомон һәм эшен дауам иттереүсе ҡалдыра алмаусылар - донъялағы иң бәхетһеҙ кешеләр.

*Гүзәл ХАММАТОВА, яҙыусы, тәржемәсе:* Тоҡом ҡалдырыуҙы мин үҙеңде дауам итеүселәрҙең мотлаҡ рәүештә туған телеңде белеүе, милли рухыңа тоғро булыуы тип аңлайым. Тоҡом һүҙенең нигеҙендә лә тап ошо мәғәнә ята. Был йәһәттән минең атайым яҙыусы Яныбай Хамматовтың ожмахтағы йәне шат икәнен тоям. Атайым мине, һөнәрем буйынса германист-филолог, этимолог булһам да, үҙ әҫәрҙәрен башҡорт теленә тәржемәләүсе итеп, ә ҡыҙымды, һөнәре буйынса табибә булһа ла, үҙ китаптарын художество яғынан биҙәүсе итеп күрергә теләне. Әйтергә кәрәк, ваҡытында беҙ атайыбыҙҙың был теләгенә ҡаршы булһаҡ та, унын хыялы үҙенән-үҙе тормошҡа ашты. Мин уны юҡһынып, әҙәбиәткә яҡыныраҡ булырға теләп, тәржемә эшенә тотондом, ҡыҙым да унын китаптарын биҙәне, үҙе лә башҡа телдәрҙән башҡортсаға әҙәби әҫәрҙәрҙе тәржемә итә. Ейәнсәрем Әйшә Фатима Мостафина исемендәге 20-се башҡорт гимназияһынын 1-се синыфында уҡый, башҡортса матур һөйләшә, Наилә ейәнсәремә 2 йәш, унын да теле башҡортса асылды. Шулай итеп, атайым үҙ тоҡомон ғына түгел, тоҡомон дауам итеүселәргә эшен дә мираҫ итеп ҡалдыра алды. Быны эшләй алмаусыларҙың ғүмере бушҡа үтәлер, тип уйлайым.

*Лилиә ҺАҠМАР, шағирә:* Тик ауырыу сәбәпле генә үҙ тоҡомон дауам иттереүсене ҡалдыра алмағандарҙы ғына аңларға булалыр. Ә һаулығы һәм башҡа мөмкинлеге була тороп та, тоҡомон ҡалдырмай ғүмер юлын тамамлаусыны мин үҙенең киләсәген сүллектә ҡом йә таш араһына күмеп китеүсегә тиңләр инем. Икенсенән, әгәр ҙә тоҡомон һинең шәжәрәңде дауам итмәй, йәғни икенсе милләтте арттыра икән, быны ла тоҡом ҡалдырыуға тиңләп булмай. Ундайҙар үҙ нәҫелен, тоҡомон башҡаларға бүләк итеүселәр. Тоҡом ҡалдырыу төшөнсәһендә рухи йөкмәтке ятырға тейеш. Тәбиғәттә лә бит бер ваҡытта ла һыйырҙан ат тыумай, йә - киреһенсә.

Үҙ эшеңде дауам итеүсене, икенсе һүҙ менән әйткәндә, шәкертеңде ҡалдырыуға килгәндә, был да кеше ғүмеренең мөһим бер бурысы һанала. Эшеңде дауам итеүсе ул һин башлаған эште генә дауам итеп ҡалмай, һин ирешкән уңыштарҙы һаҡлаусы, дауам итеүсе һәм үҫтереүсе лә. Урыҫтарҙа "Минән һуң үлән дә үҫмәһен" тигән бик ғибрәтле бер һүҙ бар. Һәр хәлдә, кеше эштән киткәндә башҡалар ҙа көн күргән ул биләмәне тапандыға йә сандауға әйләндереп китергә тейеш түгел.

**Әмир ҒҮМӘРОВ яҙып алды.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ЕҢЕҮҘӘР ҺӘМ ЕҢЕЛЕҮҘӘР...

## иң тәүҙә аңда барлыҡҡа килә



**Ҡайҙандыр килеп сыҡҡан ҡап-ҡара шәүләләр бер-береһе менән әллә алыша, әллә шаяра - аңламаҫһың; кемдер йылан һымаҡ һығылмалы хәрәкәттәр яһап, дошманына ташлана, кемдер маймыл һымаҡ ырғаңлай, тәгәрәп йөрөп, дошманын албырғата, кемдер ҡылысын ян-яҡҡа һелтәп, күренмәҫ дейеү-аждаһалар менән алыша. Ярты сәғәт самаһы дауам иткән алыш алҡыштарға күмелеп тамамланды. Сибай ҡалаһындағы "Ҡара аждаһа" үҫмерҙәр спорт клубының сығышын тәү ҡат күргәндә һоҡланыуымдың сиге булманы: шәүләләр минә икенсе ҡалала, сит илдә, хатта башҡа планетала йәшәгән кешеләр кеүек ҡабул ителде. Уҡыусы ғына балаларҙың бындай хәрәкәттәр эшләй алыуы аңым етмәҫлек күренеш ине.**

**"Ҡара аждаһа"ла сынығыу алып, ушу көрәшенең бер түгел, ике төрө буйынса донъя чемпионы исемен яулаған Тимур Кәримов бөгөн Өфөләге "Прайд" спорт клубында тренер булып эшләй. Ул БДУ-нын Сибай институтында хоҡуҡ факультетын тамамлай, йәш ғалимдар һәм фәнни коллективтар өсөн бирелгән Башҡортостан Республикаһы грантына эйә була. Әлеге көндә БДУ аспиранты, һөнәре буйынса ла, яратҡан шөғөлө буйынса ла эшләй - юрист-консультант, шулай уҡ тренер. Башҡортостан Ушу федерацияһынын төп секретары вазифаһын да ышанып тапшырғандар егеткә. Был юлы тәрбиәләнеүселәре өсөн янып йөрөгән тренерҙы Башҡорт дәүләт аграр университетынын спорт залында үткәрелгән Тай боксы (муай тай) буйынса республика беренселегендә тап иттек.**

Дауамы 6-сы биттә.

✓ *Элек эшһеҙ кеше булманы, эшһеҙҙәрҙе хөкөм иттеләр, ә бөгөнгө көндә эшһеҙҙәргә пособие түләйҙәр. Бер таныш һөйләп торҙо: "Бына ҡаҙанлыҡта эшләргә кеше таба алмайым, бөтә кеше эшһеҙ булараҡ теркәлеп бөткән"...*



Аһ-Аһ!

# АМЕРИКАНЫ...
## уҙып киттекме икән?

**Радионан йыр ағыла. Ғәжәйеп матур моң, һүҙҙәре һуң, һүҙҙәре! Мәк сәскәһен өҙҙөм яңылыш ҡына, сүп үләне менән бутаным... Заманалар шундай үҙгәрҙе шул. Беҙ яратып үстергән мәк сәскәһе (ағы, ҡыҙылы, алһыуы булыр ине) иң киткес ҡурҡыныс ағыуға, наркотик ҡоралға әүерелде. Беҙ киндер, тарма тип атаған, орлоғон ҡыҙҙырып ашарға яратҡан үлән дә шундай көскә эйә икән. Хәҙер беҙ уларҙы ҡый үләне менән бергә баҡсанан йолҡоп ташлайбыҙ. Күренеп кенә ҡалһындар!**

Беҙҙең быуын, әйтерһең дә, ике юл сатында тороп ҡалды - яңыға өйрәнә алмайбыҙ, ә иҫкене һағынһаҡ та кирегә юл юҡ. Ҡайһы саҡта ысынлап та совет йылдары һағындыра. Элек эшһеҙ кеше булманы, эшһеҙҙәрҙе хөкөм иттеләр, ә бөгөнгө көндә эшһеҙҙәргә пособие түләйҙәр. Бер таныш һөйләп торҙо: "Бына ҡаҙанлыҡта эшләргә кеше таба алмайым, бөтә кеше эшһеҙ булараҡ теркәлеп бөткән, берәһенең дә эшләгеһе килмәй..."

Беҙ аңламаған нәмәләр күп инде ул. Гөрләп торған колхоз-совхоздар бөттө бит - үҙгәртеүҙәрҙең бүтән юлдарын тапманылар, барыһын да емереп ташланылар. Завод-фабрикалар шәхси милеккә әйләнде, ә иң ҡыҙығы, 30- 40 өйлө ауылда ла кәмендә ике магазин тоталар, эшҡыуарҙар магазины. Тағы ла шуға баш етмәй: элек Себергә һөргөнгә ирекһеҙләп ебәргәндәр, хәҙер унда үҙ ирке менән эшкә китәләр. Әллә тәүәккәлләп ҡарайһы инде...

Октябрят, пионер, комсомол - бына шулар һағындыра. Бала саҡтан тәртипкә, тәрбиәгә беҙҙе ошо ойошмалар өйрәтте. Беҙ үҫкән саҡта спорт ярыштары, сәнғәт буйынса ярыштар, олимпиадалар бер ниндәй ҙә аҡса уйынына ҡоролманы, кеше шундай ихласлыҡ менән мәктәп, район, ил данын күтәрергә ынтыла ине. Хәҙер ҙә бар ундайҙар, әммә күп нәмәне аҡса хәл итә.

Колхоз өмәләре, коммунистик өмәләр кешене дөйөм эшкә йәлеп итеүҙең бер сараһы булды. Ҡайҙа ти ул хәҙерге кешене ундай өмәләргә сығарыу! Күптәр хәҙер тормошҡа битараф.

... Ҡыуып китербеҙ, уҙып китербеҙ,
Американы яҡын йылдарҙа, - тип тә йырлай торғайныҡ ул замандарҙа. Белһәң ине, уҙып китә алдыҡмы икән беҙ Американы? Уҙһаҡ, ҡайһы яҡтан: әхлаҡ яғынанмы, матди байлыҡ яғынанмы, әллә йәшәү рәүеше яғынанмы? Һорауҙар, һорауҙар... Яуап тапмай ултырам әле шуларға.

**Зарифа АБЫҘБАЕВА.**
**Бөрйән районы.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

**Уның сығыштарында, публицистик мәҡәләләрендә йыш ҡына "үкенескә ҡаршы", "ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы"тигән һүҙбәйләнештәрҙе осратырға тура килә. Һәм һәр осраҡта ла ошо һүҙбәйләнешкә тиклемге һүрәтләнгән ваҡиғаға, хәлгә бәйле фекерҙең икенсе өлөштә инҡар ителеүе бәйән ителә. Ошо логикаға ҡарап ҡына ла бында һүҙҙең тарих, атап әйткәндә, башҡорт халҡы тарихы хаҡында барғанлығын аңлауы ҡыйын түгел. Ә бит беҙҙең тарих , асылда, ана шундай "ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы"ларҙан торған кеүек тә. Бигерәк тә XVI быуаттың икенсе яртыһынан күҙәтелә башлай был күренеш. Әйтергә кәрәк, шул замандан алып хәҙерге көнгәсә һуҙыла ул. Һәр осраҡта ла башҡорт ҡаһарманлығының, башҡорт физаҡәрлегенең, башҡорт толерантлығының "яуапһыҙ" ҡалыуына бәйле тарихтың парадокска тиң ошо күренеше. Ҡыҙғаныҫка ҡаршы. Үкенескә ҡаршы. Халҡыбыҙ тарихының ошо хәҡиҡәте хәле хаҡында билдәле ғалим, тарих фәндәре докторы, Башҡорт дәүләт университетының тарих факультеты деканы Марат ҠОЛШӘРИПОВ түбәндәгесә фекер йөрөтә:**



# БЕҘҘЕҢ ТАРИХ - КӨРӘШ ТАРИХЫ

## Һүҙ - Марат Ҡолшәрипов тураһында

"Ысынлап та, Рәсәйгә ауыр саҡта ғына хакимдар башҡорттарҙы иҫенә төшөргән һәм төшөрә. Шул уҡ 1812 йылғы Ватан һуғышын ғына алайыҡ. 1773-1775 йылғы Салауат Юлаев етәкселегендәге милли азатлыҡ хәрәкәтенән һуң һуңғы сиккә еткерелеп ҡыйратылған башҡорттар Наполеонға ҡаршы 28 полк ебәрә. Был тарихтың феноменаль күренеше: йәғни үҙ-ара Килешеүҙе боҙған өсөн башҡорттар Рәсәйгә ҡаршы яуға күтәрелә, ихтилал еңелә, батырҙар дарға аҫыла, ил етемһерәп ҡала, шул осраҡта ла башҡорттар Рус дәүләте менән төҙөгән тәүге Килешеү шартына тоғро булып ҡала, йәғни яу килгәндә атлы ғәскәр ебәреү шартын үтәй...

Башҡорттар шулай уҡ рус-япон, беренсе империалистик һуғышта ҡатнаша. Федераль буржуаз революцияһынан һуң башҡорт милли хәрәкәте тоҡанып китә, ул хәрби көстәренә таянған Рәсәйҙәге иң көслө хәрәкәт була. Тап ошо мәл Рәсәй өсөн тағы ла ауыр мәл килә, йәғни империя сит ил интервенттары ҡыҫымында ҡала. Рәсәйҙә йәшәүсе халыҡтар араһында үҙенең көслө һәм күп һанлы армияһы булған башҡорттар Рәсәйгә тағы ла кәрәк була. Шуға күрә, башҡорт ғәскәре ҡыҙылдар яғына сыҡҡас, большевиктар башҡорттарҙың автономиялы республикаһын, уларҙың үҙбилдәләнешкә хоҡуғын таный. Граждандар һуғышы үтеп, яңы совет власы нығынғас, был Килешеү Ленин тарафынан "ҡағыҙ киҫәге" тип атала.

80-се йылдарҙың икенсе яртыһында "Урал" башҡорт халыҡ үҙәге башлаған көслө милли хәрәкәт эшмәкәрлеге барышында 1990 йылдың 11 октябрендә үҙаллылыҡ тураһындағы Декларация ҡабул ителде. Ул саҡтағы Рәсәй Федерацияһы Президентының бөтөн ил буйынса абруйы ныҡ ҡаҡшаған саҡта тағы ла беҙ уға кәрәк булып сыҡтыҡ. Дауыл үткәс, беҙ тағы ла Рәсәйгә кәрәкмәйбеҙ... "

"Халҡының тарихын уның үҙ улдары яҙырға тейеш", тип әйткән бер аҡыл эйәһе. Быға өҫтәп, тарихсы булыу - көрәшсе булыу, тип тә әйтергә булыр ине. Ғөмүмән, халҡыбыҙ тарихын бар тулылығында аңлар өсөн уны үҙ йөрәгең аша үткәреп, кисереп ҡарарға кәрәктер ул. Әгәр ҙә башҡорт тарихын башҡа милләт вәкиле яҙа икән, ул барыбер ҙә күберәген факттарҙы теркәүсе йылъяҙмасы ғыналыр. Шулай булғас, халҡыбыҙ тарихын өйрәнеүсе ғалим үҙ яҙмаларында һәм телмәрендә "ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы", "үкенескә ҡаршы" тигән һүҙҙәрҙе әйтә икән, был һүҙҙәрҙең артында шул тарихты үҙ йөрәге аша үткәргән кешенең кисереше ята. "Балыҡ тураһында яҙыр өсөн балыҡ булып, бала тапҡан ҡатын тураһында яҙыр өсөн үҙеңә бала табып ҡарарға кәрәк", тип тә әйткән бер аҡыл эйәһе. Хаҡ һүҙҙәр.

Нисек итеп үҙенең тарихсы булып китеүе хаҡында Марат Мәхмүт улы шулай аңлата: "Тарихсы булырға мин мәктәптә уҡыған саҡта уҡ ныҡлы ҡарарға килгәйнем. Әлбиттә, ул саҡта башҡорт халҡының тарихын 1917 йылда ғына башлана, тип уҡыталар ине беҙгә. Йәнәһе, уға тиклем башҡорттоң бер ҡаҙанышы ла булмаған һәм, йәнәһе, бары тик Октябрь революцияһы ғына был халыҡты милләт иткән. Уларса иҫәпләгәндә, "юҡҡа сыҡҡан халыҡ" нисек итеп XX быуат башында Евразия кимәлендә үҙ ғәскәрен ойоштороп, азатлыҡ көрәшенә күтәрелеп, үҙ автономияһын төҙөй алған һуң? Бындай һорауҙар мине һәр саҡ борсоно. Баш ҡалаға уҡырға килгәндә беҙҙең халыҡ тарихында ниндәйҙер Аҡ батша булғанлығы хаҡында ишетеп өлгөргәйнем. Бәхетемә күрә, халҡыбыҙҙың тарихын өйрәнеү, ундағы аҡ таптарҙы бөтөрөү ғәмәле минең студент һәм артабанғы ғилми эшмәкәрлегем йылдарына тура килде. Әле килеп, үҙемде халҡыбыҙ тарихының һәр осоро хаҡында һөйләр өсөн етерлек мәғлүмәт туплаған тарихсымын, тип иҫәпләйем. Ҡыҙғаныҫка ҡаршы, халҡыбыҙҙың үткәненә бәйле тарихи хәҡиҡәтте элек тә, хәҙер ҙә, инҡар итергә, күрмәҫкә, танымаҫка тырышыусылар күп. Беҙҙең тарих - көрәш тарихы шул. Шуға күрә беҙгә хәҙерге көнөбөҙ өсөн генә түгел, халҡыбыҙ тарихына ҡарата ғәҙеллек мөнәсәбәте урынлаштырыу өсөн дә көрәшеп йәшәргә тура килә..."

ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Милләтебеҙ именлегенә, уның тарихына ҡарата берәр хилафлыҡ ҡылынһа, беҙ ниндәйҙер ҡарарға килер, ғәмәл ҡылыр алдынан иң тәүҙә ил арҡаһы булырлыҡ ир-уҙамандарыбыҙҙың ауыҙына ҡарайбыҙ. Иң тәүҙә уларҙың һүҙен көтәбеҙ. Ана шундай ир-уҙамандарыбыҙҙың береһе ул Марат Мәхмүт улы. Әле яңы ғына булған кеүек үткән быуаттың 80-сы йылдары аҙағында, 90-сы йылдары башындағы ваҡиғаларға. Ул саҡта ла "Урал"башҡорт халыҡ үҙәге рәйесе булған Марат Мәхмүт улы үҙенең арҡадаштары менән көрәштең алғы сафында барҙы. Шул мәлдәргә ике тиҫтә йыл үтһә лә, Марат ағайыбыҙ һаман да сая, төҫ ташламай, һаман да алғы сафта. Әммә ваҡыт аяуһыҙ, ғүмер аҡҡан һыуҙай үтә. Ҡыҙғаныҫка ҡаршы, әммә үкенескә ҡаршы түгел. Ағайыбыҙ ошо арала аҡһаҡал йәшенә лә, елле етмешенә лә еткән икән. Әлбиттә, уға 70 йәш биреп булмай. Уны был байрамы менән гәзитебеҙҙең меңәрләгән уҡыусылары исеменән ҡотлайбыҙ. Мең йәшә, ил ағаһы! Үҙеңә һәм һүҙеңә, эшләгән эштәреңә күҙ теймәһен! Мәшә Аллаһ!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Быйыл 13 мартта республиканың 53 районында ҡала һәм ауыл биләмәләре урындағы үҙидараһының вәкиллекле органдары депутаттарын һайлау буласаҡ. Бынан тыш, 13 муниципаль районда һәм 21-се округ буйынса Мәләүез ҡала округында Совет депутаттарын өҫтәмә һайлау үткәреләсәк. 28-се Отрада бер мандатлы һайлау округында (Стәрлетамаҡ ҡала округы) һәм 45-се Иглин бер мандатлы һайлау округында (Иглин, Нуриман һәм Ҡариҙел райондары) республика парламенты депутаттарын өҫтәмә һайлау үтәсәк. Һайлаусылар исемлегенә 1 млн 200 меңдән ашыу һайлаусы индереләсәк, уларға 7378 депутат һайларға тура килсәк. Әле кандидаттар күрһәтеү бара.

✓Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙың киләһе ултырыштарының береһендә депутаттар баланы уллыҡҡа йә ҡыҙ итеп алғандарға бер тапҡыр бирелә торған ярҙамды әсәлек капиталы күләменә еткереү тураһындағы закон проектын ҡараясаҡ. Әсәлек капиталы күләме әле 365 мең һум тәшкил итә. Ул уллыҡҡа йә ҡыҙ итеп алынған һәр бала өсөн биреләсәк. Йәғни ғаилә ике баланы аҫырауға ала икән, тимәк, ул ике бала өсөн 730 мең һум аласаҡ. Был аҡсаны ғаиләнең торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға баланы дауалауға һәм һауыҡтырыуға, йә уны уҡытыуға тотонорға мөмкин буласаҡ.

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов Указы менән Георгий Шебаев БР һаулыҡ һаҡлау министры итеп тәғәйенләнде.

✓Торлаҡ-коммуналь хужалыҡты реформалауға булышлыҡ итеү фонды Башҡортостанға халыҡты туҙған йорттарҙан күсереү өсөн тағы ла 700 млн һум аҡса бүлде. Аҡса быйыл уҡ күсереләсәк, әммә уға тиклем адреслы программа төҙөләргә тейеш. Бынан тыш, республикаға йорттарҙы капиталь ремонтлау өсөн дә аҡса бүленәсәк. Фонд эшләй башлағаны бирле республикаға 8 млрд һум тирәһе аҡса бүленгән.

✓Өфөлә финанс проблемалары буйынса Рәсәй-Франция семинарының сираттағы сессияһы булды. Ике илдең төп финанс белгестәре Рәсәйҙең 2010 йылғы социаль-иҡтисади үҫеше, донъя валюта-финанс баҙары перспективаһы һәм проблемалары, Рәсәй иҡтисадының башҡа көнүҙәк мәсьәләләре буйынса фекер алышты.

*✓ Башҡорттарҙың үҙ ирке менән Рәсәй дәүләтенә ҡушылыу ваҡытынан алып Рәсәй етәкселегә милли сәйәсәт алып барырға мәжбүр булды. Был сәйәсәт башҡорттарға ғына түгел, башҡа милләттәргә лә ҡағылды.*

*АҘНА ШАҢДАУЫ*

# ХОҠУҠИ ДӘҮЛӘТТӘ ЙӘШӘЙБЕҘ ТҮГЕЛМЕ,

## йәки Рәсәй буйлап ниндәй шәүлә йөрөй?

**1996 йылдың 17 ноябрендә Нальчикта, Ҡабарҙа-Балҡар Республикаһының баш ҡалаһында, балҡар халҡының беренсе съезы булып үтте. Уның эшендә миңә лә ҡатнашырға тура килде. Балҡарҙар ул саҡта Рәсәй Федерацияһы составында айырым (йәғни, ҡабарҙаһыҙ ғына) Балҡар республикаһын булдырырға маташҡайны. Килеп сыҡманы. Съезда һайланған яңы республика хөкүмәте ағзалары икенсе көндө үк ҡулға алынды. Ә бер нисә көндән съезда һайланған балҡар президенты Суфьян Беппаев телеэкрандан үҙ вәкәләттәренән һәм Балҡар республикаһын булдырыу идеяһынан баш тартты. Хәйер, быныһы һүҙ араһында ғына. Һүҙем балҡар халҡы тураһында түгел, ә Ҡабарҙа-Балҡар республикаһының баш ҡалаһында ғәжәпләндергән бер күренеш хаҡында.**

Күҙ алдына килтерегеҙ әле, Нальчик урамдарының береһе Ҡабарҙа урамы, ә икенсеһе Балҡар урамы тип атала. Белеп тораһығыҙҙыр, ҡала-ауылдарҙың урамдарын атауҙың үҙ тәртибе һәм йолаһы бар. Советтар Союзында урамдарға, майҙандарға, проспекттарға һәм магистралдәргә, гәҙәттә, революция башлыҡтарының, күренекле ижад әһелдәренең исемдәрен, иҫтәлекле ваҡиғаларҙың атамаларын һәм Советтар Союзында йәшәгән халыҡтарҙың ҡаҡшамаҫ дуҫлығын сағылдырған исемдәрҙе ҡушырға тырыштылар. Әйтәйек, мин Өфөлә Дағстан урамында йәшәйем. Баш ҡалабыҙҙа тағы ла Әрмән, Грузин, Белорус, Абхаз, Татар, Ҡабарҙа, Тажик, Алтай, Аджар, Әзербайжан, Карел урамдары, Осетин тыҡырығы бар. Башҡа халыҡтар атамаларын йөрөткән урамдар ҙа барҙыр, эҙләп торманым. Был республикаларҙа һәм хәҙер инде үҙ аллы дәүләттәрҙең баш ҡалаларында ла Башҡортостан йәки Башҡорт, йә булмаһа, Өфө урамдары барҙыр, тигән өмөттәмен. Булырға тейеш. Милләт-ара татыулыҡты һәм халыҡтар араһындағы дуҫлыҡты СССР-ҙа шулайтып нығыттылар. Ә бына "Башҡорт" атамаһын йөрөткән урам Өфөлә юҡ. Ә Ҡаҙанда "Татар", Чебоксарҙа "Сыуаш" урамдарын таба алмаҫһығыҙ. Ни өсөн икән, тип уйлайһығыҙҙыр. Ерле милләттәргә (автохондарға, йәғни) үҙҙәрен ошо ергә теләһә ниндәй юл, шул иҫәптән урам атамалары менән бәйләргә кәрәкмәй. Улар былай ҙа ошо ерҙең хужалары. Улар был төбәккә атама менән түгел, ә ата-бабаларының ҡәберҙәре, ер-һыу атамалары, быуаттар буйына яҙылған боронғо тарихы менән айырылғыһыҙ бәйләнгән. Ә балҡарҙарға килгәндә инде, уларҙың был аҙымға барыуы (йәғни, республиканың баш ҡалаһы урамдарының береһенә үҙ халҡының атамаһын биреүҙәре) милләттең хәле мөшкөл булыуҙан килә. Бер-береһе менән бер нисек тә (телдәре, тарихтары, мәҙәниәте, йолалары, милли менталитеты менән) бәйле булмаған ике милләт "халыҡтар атаһы" Иосиф Виссарионович Сталиндың ихтыяры менән "уртаҡ йортта" "күршеләш" йәшәү ике халыҡҡа ла файҙа килтермәгән. Улар бер-береһен асыҡтан-асыҡ дошман күрә, бер-береһе хаҡында мыҫҡыллы көләмәстәр һөйләй, булыр-булмаҫ имеш-мимештәр уйлап сығара, уйҙырмалар булдыра. Ҡабарҙа менән балҡар араһында осҡон уйнап тора. Сталин осоронда Кавказдан Себергә һөрөлгән балҡарҙарға 1990 йылдар башында президент Борис Ельциндың реабилитацияланған халыҡтар тураһындағы указына ярашлы аҡсалата компенсация бирелә. Әммә был аҡса башлыса таулы райондарҙа урынлашҡан балҡар ауылдарына барып етмәй. Был аҡсаға һуҙылған газ үткәргестәр, һалынған юлдар, төҙөлгән йорттар тигеҙлектәге ҡабарҙа ауылдары өсөн генә булып сыға. 1944 йылда бер тапҡыр нахаҡҡа ғәйепләнеп, ете-ят ергә һөрөлгән милләт ҡабаттан яфа кисереүгә дусар ителә. Балҡар халҡының зыялылары, аптырағас, милләттең күп һанлы сәйәси, иҡтисади, рухи мәсьәләләрен хәл итеү өсөн һуңғы сараға бара - үҙ республикаһын булдырырға ынтыла. Ләкин был теләк шунда уҡ ҡаты ҡул менән баҫыла. Баш күтәреүселәрҙең (йәғни, инициатива күрһәтеүселәрҙең) башына һуғыла. Ул саҡта был хәлде Чечня синдромы менән аңлаттылар. Йәнәһе, Кавказда милли мәсьәләләр бик ҡатмарлы. Был иһә Рәсәйҙең именлеге өсөн хәүефле.

Эйе, милли мәсьәлә Рәсәйҙә һәр ваҡыт - империя осоронда ла, СССР мәлендә лә, Федерация булғанда ла, әле лә, бик ҡырҡыу торҙо һәм тора. Бер быуат эсендә генә ике тапҡыр - 1917 йылдан һәм 1991 йылдан һуң - Рәсәйҙәге милләттәр үҙ мәсьәләләрен күтәреп сыҡты. Ҡайһы берәүҙәр уйлағанса, тел, мәҙәниәт, рухиәт кенә түгел, ә тәү сиратта, иҡтисади проблемалар күтәрелә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уларҙы бер кем дә хәл итергә ынтылманы. Милли мәсьәлә бөгөн илебеҙҙә сиҡан кеүек эрен йыйып ҡына ҡалмай, яман шеш һымаҡ метастазаларын йәмғиәтебеҙҙең бөтә ҡатламдарына тарата. Иң оло һәм ҡурҡыныс, дәүләттең именлегенә янаған милли мәсьәлә бөгөн - милләтселек. Ғөмүмән, "милли мәсьәлә", "милләтселек" һүҙҙәренең мәғәнәһен нисегерәк аңларға икән? Әйтәйек, ике кеше урамда һуғыша башлаһа, был милли мәсьәләме? Тештәрен ҡыҫып өндәшмәй генә һуғышһалар, был енәйәт ҡылыу була, ә инде бер-береһенең милләтен яманлап телгә алһалар - сәйәсәт.

Дәүләтебеҙҙең милли сәйәсәте булдымы һуң? Әлбиттә. Башҡорттарҙың үҙ ирке менән Рәсәй дәүләтенә ҡушылыу ваҡытынан алып Рәсәй етәкселеге милли сәйәсәт алып барырға мәжбүр булды. Был сәйәсәт башҡорттарға ғына түгел, башҡа милләттәргә лә ҡағылды. Батша башҡорттарға аҫабалыҡты һаҡларға, дингә, телгә, йолаларға ҡыҫылмаҫҡа, ә башҡорттар батшаға тоғро хеҙмәт итергә, яһаҡ түләргә вәғәҙә итте. Бына ошо була инде уйланылған милли сәйәсәт. Әммә артабан Үҙәк вәғәҙәләрен боҙа. Мәскәүҙең милләттәргә ҡарашы үҙгәрә. Ҡорал күтәрелә. Ҡан ҡойола. Артабанғы милли сәйәсәт "ҡамсы һәм перәник" принцибы буйынса ойошторола. Хәйер, ул принцип бөгөн дә иҫкермәгән. Ана, чечендарҙы ҡайһылай "ҡамсыланылар", ҡандары йылға булып аҡты. Бөгөн иһә, был төбәккә Үҙәктән аҡса дарья булып аға. Йәғни, улар өсөн "перәник" мәле килеп еткән булып сыға.

Рус халҡы өсөн дә "перәник" осоро килеп етте. Үткән аҙнала иң юғары кимәлдә, йәғни, Кремлдә, һүҙ илдәге милли проблемалар, милләтселек тураһында барҙы. Рус милли мәҙәниәтенә айырым иғтибар бүленергә тейеш, тигән фекер яңғыраны. Был һүҙҙәрҙе әйтеүсе РФ Президенты фекеренсә, рус мәҙәниәте - күп милләтле мәҙәниәтебеҙҙең арҡа һөйәге. Был тәбиғи, тип дауам итте ул һүҙен, - бит рустар - Рәсәйҙең иң ҙур халҡы, рус теле - дәүләт теле, ә рус православие сиркәүе - илебеҙҙең иң күп һанлы конфессияһы. Уның һүҙҙәренә ҡарағанда, бөгөн рус характерының иң яҡшы һыҙаттарын - түҙемлелекте, үҙ-үҙенә ышаныуҙы, эскерһеҙлекте, күршеләр менән һыйышып йәшәй алыуҙы үҫтерергә, рус фольклорына, заманса рус музыкаһына һәм әҙәбиәтенә ярҙам итергә кәрәк.

Уның фекерен башҡалар дауам итте. Мәҫәлән, коммунистар партияһы башлығы Геннадий Зюганов фекеренсә, власть рәсми рәүештә рус халҡын дәүләт булдырыусы халыҡ, тип иғлан итергә тейеш. Ә Дәүләт Думаһындағы ЛДПР фракцияһының етәксеһе (һәм бер үк ваҡытта Владимир Жириновскийҙың нәҫеле) Игорь Лебедев Рәсәй Федерацияһы Конституцияһына үҙгәрештәр индереп, илдең милли-территориаль бүленешенән баш тартырға һәм губернизацияға күсергә кәрәк, тип белдерҙе. Уның фекеренсә, большевиктарҙың властка килгән мәлдәге иң ҙур хаталарының береһе - милли аҙсылыҡтарға таяныуы булған.

Был фекерҙәр яңы түгел. Уларҙы быға тиклем икенсе бер оло етәксе - Иосиф Виссарионович Сталин - яңғыратҡайны инде. 1945 йылдың майында Бөйөк Ватан һуғышында еңеү уңайы менән Кремлдә табын ойоштором. Унда Сталин тост әйтә. Мин был тосты совет халҡы һәм иң тәүҙә рус халҡы һаулығы өсөн күтәрергә теләр инем, ти ул. Мин рус халҡы һаулығы өсөн эсергә теләйем, сөнки ул Советтар Союзы составына ингән милләттәр араһында иң бөйөк милләт булып тора, тип дауам итә Сталин. Рус халҡы үткән һуғышта илебеҙҙең башҡа халыҡтары араһында Советтар Союзының идара итеүсе көсө булараҡ танылыу тапты. Рус халҡы айыҡ аҡылға, ныҡлы характерға һәм түҙемлеккә эйә. Рус халҡының Совет хөкүмәтенә булған ышанысы кешелектең дошманы - фашизмды еңеүҙе тәьмин итеүсе хәл иткес көс булып торҙо. Рәхмәт уға, рус халҡына, ошо ышаныс өсөн, тип тамамлай үҙенең тосын Иосиф Сталин. Бынан һуң да илдең өҫтөндә сәйәси золом дауылы уйнауын дауам итә. СССР-ҙа йәшәгән милләттәр, шул иҫәптән генералиссимустың рәхмәт һүҙенә лайыҡ булған рус халҡы, лагерҙарға оҙатыла, язаға тартыла, үлемгә дусар ителә. Бер нәмә лә үҙгәрмәй, йәғни.

Бөгөнгө көндәргә әйләнеп ҡайтайыҡ. Ғәжәп, дүшәмбе көнө Кремлдә өҫтә әйтеп үтелгән осрашыу була, ә икенсе көндө үк илебеҙҙең иң күп тиражлы гәзиттәренең береһендә "Нисек урыҫтарҙы Төньяҡ Кавказдан ҡыуып сығаралар" тип аталған дауамлы мәҡәлә донъя күрә. Ә ЛДПР Ростов өлкәһенең, Ставрополь һәм Краснодар крайҙарының етәкселек органдарында ниндәй милләт вәкилдәре өҫтөнлөк итеүен асыҡлап, үҙ тикшереүен үткәрергә лә өлгөргән. Баҡтиһәң, ул төбәктәрҙә түрәләрҙең 70-80 проценты әрмәндәр, әзербайжандар, адыгтар. Урыҫтар юҡ тиерлек. Ә Мәскәү мәктәптәрендә белем алған балаларҙың 40-50 проценты урыҫ балалары түгел. Быны ла ЛДПР иҫәпләп сығарған.

Нимә генә тип әйтергәләр инде был осраҡта? Ғәҙәттәгесә, Рәсәй Федерацияһының Конституцияһын асам. 19-сы статья, 2-се пункт. Енесенә, расаһына, милләтенә, теленә, сығышына, мөлкәтенә һәм вазифаһына, йәшәгән урынына, дингә мөнәсәбәтенә, ижтимағи берләшмәләр эшендә ҡатнашлығына ҡарамаҫтан, дәүләт кешенең һәм граждандың хоҡуҡтарын һәм азатлыҡтарын гарантиялай. Граждандарҙың хоҡуҡтарын социаль, раса, милли, тел йәки дини сәбәптәр буйынса теләһә ниндәй формала сикләү тыйыла.

Хоҡуҡи дәүләттә йәшәргә тырышайыҡ әле, йәмәғәт!

**Таһир ИШКИНИН.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһының Дәүләт заказдарын урынлаштырыу буйынса дәүләт комитеты "ҡыҙыу телефон линияһы" асыу тураһында хәбәр итә. Түбәндәге телефондар буйынса өҫтәмә мәғлүмәт алырға мөмкин: (347) 229-09-97, 276-16-67, 276-18-20.

✓Башҡортостан Республикаһының Социаль-сәйәси һәм хоҡуҡи тикшереүҙәр институты тарафынан үткәрелгән социологик һорау алыуҙарҙа фермерҙарға ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙәр биреү эше ябайлаштырылырға тейеш, тигән фекер әйтелде. Был фекерҙе Башҡортостанда йәшәүселәрҙең социологик һорау алыуҙа ҡатнашҡан 59,3 проценты яҡланы.

✓БР Президенты Рөстәм Хәмитов Башҡортостан Республикаһы Олимпия советына етәкселек итәсәк. Был спорттың олимпия төрҙәрен үҫтереү менән шөғөлләнеүсе төбәк йәмәғәт ойошмаһы. Уставында билдәләнеүенсә, советтың төп бурысы - төбәктә олимпия хәрәкәтенә булышлыҡ итеү.

✓Йыл башынан Рәсәйҙә эшһеҙҙәр һаны 20 мең кешегә артып, 1,6 миллионға еткән. Башҡортостанда эшһеҙҙәр һаны 2011 йылдың тәүге айына 6710 кеше тәшкил иткән. 2008 йылдың октябренән мәшғүллек хеҙмәтенә көтөлгән ҡыҫҡартыуҙар тураһында 1498 ойошма мәғлүмәт биргән. Ошо осорҙа ойошма бөтөрөлөү, эшселәр һанын йәки штат ҡыҫҡартыуға бәйле 39633 кешенең эштән ебәрелеүе көтөлһә, ысынбарлыҡта 890 ойошманан 36360 кеше эштән ебәрелгән. Уларҙың 15315-е генә эшһеҙ сифатында иҫәпкә торған.

✓БР Президенты Рөстәм Хәмитов БР Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығына бер нисә спорт төрө буйынса спорт клубтары төҙөүҙе йөкмәтте. Йөкләмәгә ярашлы, быйыл райондарҙағы һәм ҡалаларҙағы филиалдары менән тау саңғыһы һәм сноуборд, бокс, мотоспорттың техник төрҙәре, ауыр атлетика, спорт һәм художество гимнастикаһы, шорт-трек, саңғыла ҡыуыу буйынса спорт клубтары һәм футбол академияһы барлыҡҡа килергә тейеш.

✓"Сочи-2014" талисмандары конкурсының тәүге этабы тамамланды. Баһалама ағзалары тәҡдим ителгән эштәрҙән Олимпиада уйындары өсөн - унауҙы, Паралимпиада өсөн өс эште һайлап алды. Һайлап алынған һүрәттәр авторҙары араһында Башҡортостандың Октябрьский ҡалаһынан Алина Хазиева ла бар.

*✓ Тирә-яғыбыҙға күҙ һалайыҡ. Ҡайҙалыр, нимәлер беҙгә ошо данлы тарих тураһында иҫкә төшөрәме? Күрһәтегеҙ миңә беҙҙең ата-бабаларыбыҙ батырлығына бағышланған музейҙарҙы, һәйкәлдәрҙе, әҙәби әҫәрҙәрҙе.*



*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

## ИҪКЕ УРЫНЫНА - ЯҢЫ...

**Иҫке автомобилде яңыһына алыштырыу программаһы 2011 йылдың сентябренә тиклем дауам итәсәк. Уҙған йылдың декабрендә тәжрибәнең икенсе этабы башланды.**

Бер ынғай ауыл хужалығы техникаһын һәм йөк машиналарын һәм автобустарҙы утилгә тапшырыу программаларын әҙерләү буйынса анкета йыйыу дауам итә. Былтыр августа ошо йүнәлеш буйынса ҡабул ителгән РФ Хөкүмәте ҡарарына үҙгәрештәр индерелде. Уға ярашлы, хәҙер программаны үткәреү ваҡытында сикләү юҡ. Яңы ҡағиҙәләргә ярашлы, программаны тормошҡа ашырыу мөҙҙәте таныҡлыҡтар биреү һәм улар буйынса яңы автомобилдәр һатыу тамамланыуға бәйле. 2010 йыл һуңына икенсе этап буйынса 84 мең таныҡлыҡ ҡалған. Тәжрибә үткәрелгәндән алып Башҡортостанда барлығы утилләштереү тураһында 18843 таныҡлыҡ тапшырылған, 9578 автомашина һатылған. Тапшырылған иҫке автомобилдәр һаны буйынса республика Рәсәйҙә бишенсе урында тора.

## ЛЕНИНДЫ БУШАТАСАҠТАР...

**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары Владимир Дмитрюк белдереүенсә, Ленин урамынан йөрөгән транспорттың бер өлөшө быйылдан күрше урамдарҙан үтәсәк. Шулай уҡ Октябрь проспектында ике урында ер аҫты юлдары эшләнәсәк.**

Былтыр баш ҡаланың торлаҡ йорттарын ремонтлауға, ҡала адреслы программаһына ярашлы, төрлө кимәлдәге бюджеттан 453 миллион һум аҡса бүленгән. 80 йорт ихатаһын төҙекләндереүгә иһә 54 миллион тотонолған. Бынан тыш, 28 мең квадрат метр юлда асфальт "ямалған".

Ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары белдереүенсә, бөгөн автомобилдәрҙе парковкалау һәм уларҙы эвакуациялау мәсьәләләре көнүҙәк булып тора. Бигерәк тә Өфөнөң үҙәгендә водителдәр, тыйылған билдә булыуға ҡарамаҫтан, машиналарын ҡалдырып йөрөй икән.

## ТӨШӨП ҠАЛҒАНДАРҘАН ТҮГЕЛ!

**Рәсәй Федерацияһының медицина юғары уҡыу йорттары араһында үткәрелгән рейтинг һөҙөмтәләре буйынса Башҡорт дәүләт медицина университеты 10-сы урын яулаған. Бынан тыш, Берҙәм дәүләт имтихандарының уртаса һөҙөмтәһенә ярашлы уҡыуға ҡабул итеү сифаты буйынса етенсе урынды биләй.**

Ғөмүмән, уҙған йыл БДМУ өсөн уңышлы була. Ул "Милли сифат билдәһе" рәсми реестрына индерелеп, ошо логотипты ҡулланыу хоҡуғын ала, "Волга буйы федераль округының иң яҡшы юғары уҡыу йорттары - 2010" төбәк-ара конкурсында лауреат була. Декабрҙә иһә БДМУ-ның илдең 26 вузы иҫәбендә 2014 йылда Сочиҙа үтәсәк Олимпия һәм Паралимпия уйындарында волонтерҙар әҙерләү үҙәге ойоштороу хоҡуғына эйә булыуы мәғлүм булды. Был конкурста Рәсәйҙең 100-ҙән ашыу вузы һәм ссузы ҡатнаша. Волга буйы федераль округының юғары уҡыу йорттары араһынан ни бары Башҡорт дәүләт медицина һәм А.Н. Туполев исемендәге Ҡаҙан дәүләт техник университеттары ғына еңеү яулай.

*ШУНДАЙ ТӘҠДИМ БАР*

**Мөхит шәхесте тәрбиәләй - был аксиома. Һүҙ архитектура өлкәһе тураһында бара. Мәҫәлән, баш ҡалабыҙҙы Салауат Юлаев һәйкәле, Еңеү паркы, Ләлә мәсетенән башҡа күҙ алдына килтереп буламы? Был образдар символға әүерелде, уларҙы баш ҡалала йәшәүселәр генә түгел, ә килгән ҡунаҡтарҙың да һәр кеме яҡшы белә.**

# ЙӨҘ ТАПҠЫР ИШЕТКӘНСЕ...

## бер тапҡыр күреүең яҡшы

Тик былар ғына етәме? Әлбиттә, юҡ! Хәҙер халыҡ сит илдәргә йыш йөрөй. Ҡайһы ғына илгә барма, һине иң тәүҙә ошо төбәктә йәшәгән халыҡтың элекке данлы еңеүҙәренә, данлы тарихи ваҡиғаларға арналған ҡыҙыҡлы урындары менән таныштыралар. Былар нимә өсөн эшләнә? Яуабы һәр кемгә лә асыҡ. Үҙеңдең ерелде, тыуған илеңде ныҡыраҡ яратыр өсөн. Яратыу, тимәк, тарихыңды хөрмәт итеү, ул тарих менән бәйле урындарға һаҡлыҡ менән ҡарау, төҙекләндереү, таҙалыҡта тотоу ул.

Бөтәһен дә үҙенә ылыҡтырыусы урындар шулай барлыҡҡа килә, һәм күптәр үҙҙәрендәге тәртипһеҙлекте ташлап, сит илдәр менән һоҡланырға китә, уларҙың артабанғы үҫеше өсөн үҙҙәренең аҡсаһын һала, ә һуңынан ҙур ҡыуаныс менән беҙгә мөғжизәләр тураһында һөйләй.

Башҡа нәмә тураһында әйтергә теләгәйнем, шикелле. Эйе, ни өсөн беҙҙә ундай урындар әҙ һуң? Бәлки, тарихыбыҙ башҡаларҙыҡынан ҡайтышыраҡтыр? Һис тә улай түгел! Беҙҙең битарафлыҡ, онотоусанлыҡ быға сәбәп. Мәҫәлән, 1812-1814 йылғы Ватан һуғышында беҙҙең ата-бабаларыбыҙ ниндәй ҙур батырлыҡтар, патриотлыҡ күрһәткән! Парижға тиклем барып еткәндәр. Бөйөк Гете башҡорттар менән һоҡланып, улар менән осрашыуы тураһында үҙенең әҫәрҙәрендә яҙып ҡалдырған. Хәҙер тирә-яғыбыҙға күҙ һалайыҡ. Ҡайҙалыр, нимәлер беҙгә ошо данлы тарих тураһында иҫкә төшөрәме? Күрһәтегеҙ миңә беҙҙең ата-бабаларыбыҙ батырлығына бағышланған музейҙарҙы, һәйкәлдәрҙе, әҙәби әҫәрҙәрҙе. Әле һуң булмаҫ борон беҙгә ошолар хаҡында уйланырға кәрәк, йәмәғәт. Төрлө реформалар, сәйәси кампаниялар, замана шауҡымдары тыуып тора, үтеп тора, тарихыбыҙ ғына беҙҙең менән ҡала. Әммә уның тураһындағы хәтирәләрҙе һүҙ менән генә түгел, ә һәйкәлдәрҙә һәм китаптарға әйләндереп тапшырырға кәрәк киләһе быуындарға.

**Рудоль АВСАХОВ.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# "ҠЫШҠЫ ВАҠЫТ"...

## юҡҡа сыҡһын, әйҙә

**Илдең Сәнәғәт һәм сауҙа министрлығы тикшереүҙәре ярты йыл һайын сәғәт уктарын йә алға, йә артҡа күсереүҙең халыҡҡа бик күп ҡыйынлыҡтар тыуҙырып ҡына ҡалмай, кешеләрҙең сәләмәтлегенә лә кире йоғонто яһауын асыҡлаған. Өҫтәүенә, эксперттар "ҡышҡы ваҡыт"тан баш тартыу тормошобоҙға тәүлектең 17 процент яҡтылығын өҫтәү мөмкинлеге бирәсәк, тип белдерә. Февралдә иһә был тема Рәсәй Хөкүмәтендә тикшереләсәк. Ыңғай ҡарар ҡабул ителә ҡалһа, 2012 йылда ил " ҡышҡы ваҡыт"һыҙ йәшәй башлаясаҡ.**

Ә халыҡ ни уйлай?

Был тема буйынса федераль киң мәғлүмәт саралары рында ла фекер алышыу бара, Башҡортостан Республикаһы Президентының блогында ла төрлө фекерҙәр яңғырай.

- "Ҡышҡы ваҡыт"тан ил сәнәғәте күргән тинлек файҙа беҙҙең өсөн ҙур зыянға әүерелә, - тип яҙа "Толерантлыҡ" НКО-һы етәксеһе Эдвард Мурзин. - Ярты йыл һайын биоритм боҙола. Күптәр сәғәт күсеүен ауыр кисерә. Өҫтәүенә, хәҙер энергия һаҡлау технологиялары быуатында "ҡышҡы ваҡыт" үҙенең асылын юғалтты. Ул көн яҡтылығын максималь файҙаланыу иҫәбенә электр энергияһын экономиялау өсөн индерелгәйне. Хәҙер иһә бөтөн ерҙә энергия һаҡлаусы лампалар тора. Шуға күрә "ҡышҡы ваҡыт"тан баш тартыу артыҡ финанс юғалтыуҙарына килтермәҫ, тип уйлайым.

-Декрет ваҡыты - пояс (биологик) сәғәтенән бер сәғәт алда барған ваҡыт, - тип яҙа икенсе бер блогер (zhavoronkov51). - Ул 1930 йылдың 16 июнендә СССР Халыҡ комиссарҙары советы ҡарары менән СССР территорияһында тәүлектең яҡты мәлен һөҙөмтәлерәк ҡулланыу, көнкүреш һәм предприятиелар ҡулланған электр энергияһын башҡаса бүлеү маҡсатында индерелә. 1981 йылдың 1 апреленән СССР "йәйге ваҡыт"ҡа күсә. Ул пояс ваҡытын ике сәғәткә уҙып китә (йәғни декрет ваҡытына тағы бер сәғәт өҫтәлә). 1990 йылда урындағы властарҙың ҡарары менән унан Украинала, Белоруссияла, Молдовала, Грузияла һәм Әзербайжанда баш тарталар. 1991 йылдың 31 мартында илдә декрет ваҡыты бөтөрөлә, әммә "йәйге ваҡыт"ҡа күсеү һаҡлана. 1991 йылдың 23 октябрендә РСФСР-ҙың Юғары советы Рәсәй территорияһында декрет ваҡытына кире ҡайтыу тураһында ҡарар ҡабул итә һәм ул 1992 йылдың 19 ғинуарында тормошҡа ашырыла. Шулай итеп, хәҙер Башҡортостан бөтөн планетанан ике сәғәткә алда йәшәй.

Рәсәй мосолмандарының Үҙәк Диниә назараты рәйесе, баш мөфтөй Тәлғәт Тажетдиндың фекере лә шулай уҡ:

-Ваҡытты күсерергә кәрәкмәй, - ти ул. - Көн үҙәге сәғәт 12-лә булырға тейеш булһа, ҡышын ул 13 сәғәт 30 минутта, ә йәйгеһен 14 сәғәт 30 минутта етә. Беҙгә былдай ваҡыт уңайлы түгел. Физиология буйынса ла был дөрөҫ түгел. Барлыҡ мосолмандар күпселек намаҙҙарҙы алдараҡ уҡыу яҡшыраҡ, тип иҫәпләй. Шуға ла мин "ҡышҡы ваҡыт"ты ҡалдырыу һәм уны күсермәү яҡлы.

Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ, хөрмәтле гәзит уҡыусылар?

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә физкультура һәм спорт комитеты рәйесе Сергей Степановтың мәғлүмәте тыңланды. Билдәләнеүенсә, былтыр баш ҡалала 2 меңдән ашыу спорт саралары үткәрелгән. Уларҙа 320 меңләп кеше ҡатнашҡан.

✓Былтыр Өфөлә һигеҙ спорт майҙансығы төҙөлгән. Бынан тыш, "Спартак" физкультура-һауыктырыу клубы, Урам баскетболы үҙәге һәм "Затон" ҡасабаһында футбол яланы файҙаланыуға тапшырылған. Яңы спорт объекттары баш ҡала халҡының спортҡа ылығыуын әүҙемләштерә. Әле Өфөлә ҡайһылыр кимәлдә спорт һәм физик күнекмәләр менән шөғөлләнеүселәр 200 мең кешене тәшкил итә.

✓Былтыр Өфөлә 100 спорт мастеры әҙерләнгән. Шул уҡ ваҡытта ҡала резервына 450 спорт мастерлығына кандидат һәм 8 мең тирәһе разрядлы спортсылар өҫтәлгән. Ете Өфө спортсыһы "Атҡаҙанған спорт мастеры" исеменә лайыҡ булған.

✓Өфөлә 72 хоккей коробкаһы бар. Уларҙың күбеһе ремонт талап итә. Иң тәүге сиратта ағастан эшләнгән ҡоймаларҙы пластиктан эшләнгәненә алыштырыу талап ителә. Күп майҙансыҡтарға электр уты ла үткәрелмәгән. Өфө ҡала округы хакимиәтенең физкультура һәм спорт комитеты рәйесе Сергей Степанов быйыл хоккей коробкаларындағы бына ошо эштәр тормошҡа ашырыласаҡ, тип билдәләй.

✓Былтыр Өфөнөң коммуналь-хужалыҡ предприятиелары 1 млн квадрат метр юлды ремонтлаған. Башҡа йылдарҙан айырмалы, хәҙер был эш комплексы тормошҡа ашырыла: юлдар киңәйтелә, тышҡы электр селтәрҙәре алыштырыла, тротуарҙар төҙәкләнделә һ.б. Шулай уҡ светофор хужалығы һәм юлдарҙағы тамғалар ҙа яңыртылған.

✓Яңы йылға тиклем ойошторолған "Ҡыш бабай-2010" конкурсы еңеүселәре билдәләнде: гран-призы Октябрь районының Ҡыш бабайҙары яуланы. Калинин районына - икенсе, Совет районына өсөнсө урын бирелде.

✓Баш ҡала урамдарын яҡтыртыусы терегөмөшлө лампочкаларҙы натрийлы лампочкалар менән алыштырыу 2005 йылдан алып 2986 мең киловатт-сәғәт электр энергияһын экономиялау мөмкинлеге бирған.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

**Яңы йылдан рәсәйлеләрҙең тормошона үҙгәрештәр алып киләсәк тиҫтәләгән яңы закондар үҙ көсөнә инә. "Коммуналка"ға, электр энергияһына һәм транспортҡа тарифтар индексациялана. Нимәләр өсөндөр хәҙер күберәк түләргә тура киләсәк. Ҡыҫҡаһы, рәсәйлеләрҙең түҙемлеген һынау дауам итә.**

# ЯҢЫ ЙЫЛДАН - ЯҢЫСА,

## түҙемлекте һынау ғына - иҫкесә



### Зыянлы ғәҙәттәргә ҡаршы

Рәсәй Хөкүмәте рәсәйлеләрҙең зарарлы ғәҙәттәренә ҡаршы көрәшергә ҡарар итте. Тәү сиратта алкоголь менән тәмәкегә һалымдарҙы ҡырҡа арттырыу иҫәбенә. Мәҫәлән, 1 ғинуарҙан алкоголь акциздары 10 процентҡа артты. Бер шешә араҡы хаҡы - 98, ә иң арзан коньяк 199 һумдан да кәмерәк торорға тейеш түгел.

Яңы йылдан тәмәкегә хаҡтар айырыуса һиҙелерлек күләмдә арттырыла. Ил Хөкүмәтендә планлаштырылыуынса, яҡындағы өс йылда тәмәкегә акциздар йыл һайын 30-40 процентҡа арта барасаҡ. Иң осһоҙ маркалар һәм айырыуса фильтрһыҙ сигареттарға ныҡ хаҡ артыуы көтөлә. Һөҙөмтәлә, мәҫәлән, әле ҡабы 10 һум торған "Прима" 15 һум буласаҡ. Ҡиммәтле сигареттар өсөн акциз әкренләп үҫәсәк. Унан һуң акциз - ул иң төп күрһәткес тә түгел әле. Һәр хәлдә, никотинға бәйлелек иң аҙ тигәндә лә 20 процент самаһына ҡиммәткә төшәсәк.

Рәсәйлеләр был хәлдәрҙең ғаилә янсыҡына һуҡтырыуын ҡапыл ғына һиҙмәҫ тә әле, сөнки магазиндар ай-ай ярым буйына былтырғы йылдың элекке һалым ставкалары буйынса етештерелгән тауарын һатасаҡ. Ләкин февралдә иҫке запастар бөткәс, яңы хаҡтар хакимлыҡ итә башлаясаҡ.

### Йәйәү йөрө

2011 йылда транспорт һалымын икеләтә кәметеүсе төҙәтмәләр үҙ көсөнә инә. Мәҫәлән, 100 ат көсө ҡеүәтле двигателле автомобилдәр өсөн ставка бер ат көсөнә 2,5 һумға тиклем, 100-150 ат көсөндәгеләр өсөн - 3,5 һум, 150-200 ат көсөндәгеләргә 5 һумға тиклем кәметеләсәк. Ҡеүәтлерәк автомобилдәр өсөн нигеҙ ставка 7,5 һумға тиклем кәметелә. Әйткәндәй, төбәктәрҙәге закон сығарыу органдары 150 ат көсөнән кәмерәк ҡеүәтә эйә авто өсөн транспорт һалымын ғөмүмән юҡҡа сығарыу хоҡуғына эйә булды. Ләкин былар бөтәһе лә миҙалдың бер генә яғы әле. Трнспорт һалымының нигеҙ ставкаһын кәметеү өсөн бер үк ваҡытта яғыулыҡҡа акциздар арттырыласаҡ. 2011 йылда улар өлөшөнә һәр литрға берәр һум һалынасаҡ. Ябай итеп әйткәндә, бензиндың литры 1 һумға ҡиммәтләнә. Был йыйымдар яңы трассалар төҙөлөшөн финанслаусы фондтар ҡарамағына китеп торасаҡ.

Был яңылыҡтар автомобилселәр сығымдарында ниндәй сағылыш табасаҡ һуң? Күп йәһәттән был автомобиль хужаларының үҙенә бәйле буласаҡ. Сөнки ни тиклем йышыраҡ руль артында йөрөһәң һәм бензин ҡойҙороп торһаң, шул тиклем күберәк түләргә лә тура киләсәк. Бензинға акциздар үҙгәреү сәбәпле, үҙ хеҙмәттәренә әле үк иң беренселәр булып хаҡ арттырыусылар таксистар булды.

Бынан тыш, "Автомобиль юлдары тураһында" Законға төҙәтмәләр үҙ көсөнә инде. Ул төбәк һәм муниципаль властарға юлдарҙы түләүле итеү мөмкинлеге бирә.

### Коммуналь түләүҙәр

Коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүҙәрҙең ҡиҫкен артыуы - һәр йыл ғинуар айына хас күренеш. Дөрөҫ, властар быйыл торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәттәре өсөн тарифтар үҫеше 15 проценттан да артмаясаҡ, тип тынысландыра тынысландырыуын. Электр энергияһына тарифтар үҫешен алып ҡарайыҡ: 2009 йылда ул 25 процент тәшкил иткәйне, быйыл ни бары 10 процент тип вәғәҙә итәләр. Газға тарифтар ике этапта - ғинуар һәм апрелдә күтәрелер. Һыу менән тәьминәт 10-20 процентҡа арта. Дөрөҫ, анығыраҡ цифрҙарҙы властар һәр төбәктә үҙҙәре билдәләйәсәк.

### Тимер юл транспорты

Ҡала транспорты халыҡ көйөфөн боҙорға өлгөрҙө лә инде: төрлө төбәктәрҙә юл хаҡы 1-5 һумға арттырылды. Мәскәүҙә, мәҫәлән, ер өҫтө транспорты 1 һумға, ә метро хаҡы 2 һумға арттырылды.

Тимер юл транспорты хеҙмәттәренә тарифтар ҙа "үҫә" бара. Мәҫәлән, ғинуарҙан купеларҙа һәм "люкс" вагондарҙа юл хаҡы 5 процентҡа, плацкарт вагондарҙа уртаса 10 процентҡа ҡиммәтләнде. Багаж йөрөтөүгә лә шул уҡ самала хаҡ күтәрелде. Ләкин 2011 йыл ағымында тарифтарҙың уртаса йыллыҡ кимәле ни бары 65 көн ғәмәлдә буласаҡ, ә ҡалған ваҡытта билеттар уртасанан ҡиммәтерәк йәки осһоҙораҡ була. Тарифтарҙың үҙгәреш графигы Рәсәй тимер юлдары сайтында алдан урынлаштырыла, шуға күрә ҡайҙалыр сәфәргә сығырға ниәтләһәгеҙ, хаҡтар осһоҙ ваҡытҡа тура килтерә алырһығыҙ.

Ташламаларҙың иң һиҙелерлек осоро яҙғы байрамдар - 7-9 майға тура килә. Юлаусылар был ваҡыт нигеҙ тарифтарҙан 50 процент самаһы аҡсаны кеҫәһендә ҡалдыра ала. Ә инде 28, 29 апрелдә, 15 июндән 30 августа тиклем һәм 29, 30 декабрҙә, киреһенсә, 20 процентҡа артығыраҡ түләргә тура киләсәк.

### Ауырымаҫҡа тырышығыҙ

Мотлаҡ медицина страховкаһы (ММС) системаһында "шым түңкәрелеш" бара. Яңы йылдан рәсәйлеләр поликлиниканы, больницаны һәм дауалаусы табипты (быға тиклем халыҡ район поликлиникаһына беркетелде, ә страховкалаусыны һайлау эш биреүселәр һәм чиновниктар ҡарамағына тапшырылғайны) үҙ аллы һайлап йөрөү хоҡуғына эйә буласаҡ. ММС системаһына үҙҙәре теләк белдереүҙәренсә, шәхси медицина учреждениелары инәсәк. Әгәр ҙә теге йәки был поликлиника йәки больница ауырыуҙан хеҙмәттәр өсөн түләү талап итә икән, хәҡиҡәттә страховкалау компанияһынан эҙләргә кәрәк. Әйткәндәй, страховкалаусыны һайлап алыу ҙа хәҙер кешенең үҙ ҡарамағына күсә. Тик поликлиника йәки страховкалаусы компанияны алыштырыу йылына бер тапҡыр ғына рөхсәт ителә.

Ә бына социаль өлкәләге башҡа ҡайһы бер яңылыҡтар шөбһәләндерә төшә. Больничный ҡағыҙҙары буйынса пособие хәҙер яңыса иҫәпләнәсәк. Иҫке система буйынса 5 йыл эш стажы булған эшсе йәки хеҙмәткәрҙең эш хаҡының 60 проценты күләмендә пособиеға хоҡуғы булһа, 5-8 йыл эш стажы менән - 80, 8 йылдан күберәк стажлылар эш хаҡының 100 процентын ҡулға ала ине. Эшкә ваҡытлыса яраҡһыҙлыҡ буйынса түләүҙәрҙең яңы тәртибе иһә 100 процент түләүҙе 15 һәм унан күберәк стажлы граждандарға ҡарата ғына ҡулланасаҡ. 8-15 йыл эшләгәндәр һәм 8 йылдан аҙыраҡ эш стажы булғандар өсөн дә нормативтар билдәләнергә тейеш ине, ләкин өс яҡлы (хөкүмәт вәкилдәре, эш биреүселәр һәм профсоюздар) комиссия социаль гарантияларҙы кәметеүсе бындай ҡарар сығарыуҙы әлегә кисектереп торҙо.

Йөклөлөк һәм бала табыу буйынса түләүҙәрҙе кәметеү буйынса ла ошондайыраҡ хәл килеп сыҡты. Яңы йылға тиклем декрет аҡсаһы күләме әсәнең һуңғы йылғы эш хаҡына бәйле ине. Дәүләт Думаһы пособие иҫәпләүҙе ике йыллыҡ эш хаҡы күләменән сығып ҡарауҙы хәл итте. Ләкин был йәмәғәтселектә ризаһыҙлыҡ тыуҙырҙы. Һөҙөмтәлә властар шундай урталыҡ тапты: декретҡа китеүсе ҡатындар пособие иҫәпләүҙең ике вариантынан (элекке һәм яңы ҡағиҙә) үҙҙәре өсөн отошло булған берәүһен һайлау мөмкинлеге алды. Быны өсөн кәрәкле төҙәтмәләрҙе Дәүләт Думаһы ғинуарҙа ҡабул итәсәк.

### Пенсия, әсәлек капиталы

- Алдан ниәтләнеүебеҙсә һәм бюджетта ҡаралыуынса, 1 февралдән бөтә төр пенсиялар 8,7 процентҡа арттырыласаҡ, - тип хәтергә төшөрә РФ һаулыҡ һаҡлау һәм социаль үҫеш министры Татьяна Голикова. - Был пенсия фонды бюджетының килем йыйыу буйынса күрһәткестәре һәм 2010 йылғы инфляция кимәленән сығып хәл ителәсәк.

Ә бына икенсе (йәки сираттағы) балаһы тыуған ғаиләләргә тейешле әсәлек капиталы ғинуарҙан уҡ индексацияланды. Хәҙер уның күләме 365 мең 700 һум. Рәсәй Пенсия фонды статистикаһы буйынса, сертификат алған ғаиләләрҙең 89 проценты уны ипотека кредиттарын ҡаплауға йүнәлтә. 2010 йылдың һуңғы көндәрендә РФ президенты Дмитрий Медведев законға үҙгәрештәргә ҡул ҡуйҙы һәм 2011 йылдан әсәлек капиталын иң кесе баланың йәшенә ҡарамайынса торлаҡ кредитын түләүгә тотонорға мөмкинлек бирелде.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



# ҠОЯШ ТАПТАРЫНАН...

## лимон ҡотҡара

### Гемоглобин күтәреү

Ҡандағы гемоглобин түбән булһа, уны күтәреү өсөн: 7 ҡалаҡ ҡарабойҙай ярмаһын һәм 7 грек сәтләүеген ҡайнар һыу менән сайҡатҡас, духовкала еңелсә киптерергә. Сәтләүектең тышын әрсеп, ҡарабойҙай менән ҡушып кофе тирмәнендә онтарға ла, 7 балғалаҡ бал ҡушып болғатырға. Көнөнә 4 тапҡыр итеп 7 көн эсендә ашап ҡуйырға. Тағы 3-4 тапҡыр курсты ҡабатларға.

### Тоҙ ултырһа

1 шыршы тубырсығын сайҡатып, 1 стакан һыуға һалып, 15 минут талғын ғына утта ҡайнатырға һәм төнәтергә. Иртән ас ҡарынға ярты стакан эсергә. Курс ике аҙна дауам итә. Араларында 15-20 көн ял ойоштороп, курсты өс тапҡыр ҡабатларға.

### Пигмент таптары

Йәйге ҡояш тәьҫиренән меланиндың бит тиреһендә тигеҙ таралмауы сәбәпле таптар барлыҡҡа килһә, әле ҡояш ҡайнар булмаған саҡта уларҙан ҡотолоп була. Бының өсөн лимондың өстән бер өлөшөн ҡырғыстан үткәреп, биткә һыларға. Дауаны ун көн дауам итегеҙ.

Шулай уҡ пигмент әйләнешен яйға һалыр өсөн бауыр эшмәкәрлеген яҡшыртырға кәрәк. Бының өсөн 10 грамм шиңмәҫгөл (бессмертник), 10 грамм гөлйемеш, 5 грамм ҡыҙыл көртмәлә япрағы (листья брусники), 5 грамм эт дегәнәген (череда) ярты литр ҡайнар һыу менән бешекләп төнәткәс, өс өлөшкә бүлеп, ун көн даууамында йылымыс итеп эсергә.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

**(Башы 1-се биттә).**

**Һеҙҙең, моғайын, тай боксын зәңгәр экрандарҙан күргәнегеҙ барҙыр. Булмаһа, ярыш шарттарын аңлатып үтәм: бында аяҡ менән дә, хатта теҙ менән дә тибешәләр, терһәк менән дә һуғышалар. Классик боксты мин тәкәләр һөҙөшөүе менән сағыштырыр инем. Ә тай боксын, йәғни муай тайҙы, улар менән сағыштырыу мөмкин түгел. Һеҙ, моғайын, яҙғы әтәс менән көҙгө әтәстең сәкәләшеүен дә күргәнегеҙ барҙыр. Осоп-ҡунып һуғыша улар. Был спорт төрө лә шулайыраҡ. Әлегә бер-берећен еңәрҙән һуғышҡан 15 йәшлек үҫмерҙәрҙе күҙәтеп торған килеш, донъя чемпионы менән һөйләшеүҙе башлап ебәрҙек...**

# ЕҢЕҮҘӘР ҺӘМ ЕҢЕЛЕҮҘӘР...

## иң тәүҙә аңда барлыҡҡа килә

**Бразилияла - футбол, Африкала илдәрендә - баскетбол, Канадала - хоккей, Азия илдәрендә көнсығыш һуғыш төрҙәре ныҡ үҫешкән. Ә беҙҙең Башҡортостанда ниндәй ҙә булһа спорт төрөнә өҫтөнлөк бармы?**

- Республикала көрәш киң таралған спорт төрҙәренең береһе. Әле бер-нисә йыл элек Өфө-Аренала билбау көрәше буйынса донъя чемпионаты булып үткәйне. Ярыштар донъя чемпионаттары кимәлендә ойошторолдо. Беҙҙең республиканан да байтаҡ көрәшселәр ҡатнашты. Беҙҙең атай-олатайҙар элек-электән майҙандарҙа бил бирмәй көрәшкән. Һәр ырыуҙың үҙенең көрәш батырҙары булған. Һабантуйҙарҙа бөгөн дә көрәш ярыштары ойошторола. Көрәш оҫталығы, ғәҙәттә, нәҫелдән килә. Атанан - улға, ағанан - ҡустыға бирелә килгән оҫталыҡ сылбырында, минеңсә, бер ҡанун бар: тәбиғәттән бирелгән көс-ҡеүәт, таҙалыҡ. Тимәк, көрәшселәр һәр ғаиләлә лә тыуымай.

Милли көрәштең бөгөнгө хәле, үкенескә ҡаршы, бик үк шәптән түгел. Тарихи яҡтан был спорт төрө беҙҙә киң ҡолас алырға тейеш һымаҡ, әммә уны үҫтерергә тейешле шарттар ҙа, матди нигеҙ ҙә юҡ. Үҫмерҙәр клубтарына бөтөнләй ярҙам күрһәтелмәй. Уйлап ҡараһаң, көрәш секцияһын финанслау башҡа спорт төрҙәрен финанслауға ҡарағанда күпкә арзаныраҡ. Көрәш түңәрәген ойоштороу өсөн йомшаҡ маттар ғына кәрәк. Спортсынан махсус кейем өсөн сығымдар бөтөнләй талап ителмәй. Ә бына кикбоксинг, кунфу кеүек түңәрәктәр өсөн маттар, бирсәткәләр, тештәрҙе һаҡлай торған капылар, башлыҡтар, йәғни шлемдар һатып алырға кәрәк. Икенсенән, ярыштар тик бер ҡалала ғына үтмәй. Спортсының төрлө ҡалаларҙа уҙғарылған ярыштарҙа ла үҙен һынап ҡарағыһы килә. Үҙен башҡалар менән сағыштырып, көсөн белергә тырышыу мохтажлығы һәр спортсыға хас. Әммә ана шул финанс ярҙам булмауы бәкәлгә һуға. Матди яҡтан аҙ тәьмин ителгән ғаиләлә тәрбиәләнгән йәш спортсылар йыш ҡына теге йәки был ярыштарҙа ҡатнашыр өсөн бағыусылар эҙләргә мәжбүр...

**Тейешенсә ярҙам күрһәтелгәндә, беҙҙең илдәге әллә күпме талантлы йәштәр донъя кимәлендә танылыу яулар ине. Бөгөн Рәсәйҙә үҙҙәренә арҡа терәр терәк таба алмай, сит илдәр өсөн сығыш яһаусы ватандаштарыбыҙ бихисап бит.**

-Хатта республика чемпиондары ла Рәсәй кимәлендәге ярыштарҙа ҡатнаша алмай, төп сәбәп - әлеге лә баяғы аҡсаһыҙлыҡ. Рәсәй ярыштарында ҡатнашыусы үҫмерҙәрҙең 90 процентына бындай ярҙам күрһәтелмәй. Ҡайһы бер төбәктәрҙә теге йәки был һуғыш төрөн үҫтереүгә дәүләт тарафынан аҡса бүленә. Мәҫәлән, Воронежда, Пермдә - ушу, Ҡаҙағстан республикаһында кикбоксинг спортын маҡсатлы рәүештә үҫтерәләр. Ҡаҙағстан спортсылары ҡарамағында үҙҙәренең автобустары ла бар. Ярыштарға барыу өсөн стимулдар булдырылғанға күрә, был төбәк спортсылары һәр ваҡыт уңышлы сығыш яһай.



Тимур Кәримов
япон ниндзяһы кимоноһында.

**Мәктәптә спорт менән шөғөлләнеүсе балалар менән шөғөлләнмәүселәр араһында айырма ҙурмы? Аңлауымса, спорт менән әүҙем шөғөлләнгән уҡыусы уҡыуҙа әллә ни алдыра алмай. Сөнки дәрестәре ҡала. Ә уҡыу менән генә шөғөлләнгән балалар, ҡағиҙә булараҡ, спортты үҙһенмәй. Тағы ла, ҡайһы саҡта уҡыуҙа ла, спортта ла алдынғылыҡты биләгән балалар осрап ҡуя. Ғөмүмән алғанда, спорт - ул үҙ холҡондо тәрбиәләй торған сара түгелме ни?**

- Үҙемдән алып әйткәндә, спорт менән шөғөлләнмәҫ элек өслө, хатта икеле билдәләрен йыш ала инем. Кунг-фу менән шөғөлләнә башлау менән уҡыуым шунда уҡ яҡшырҙы - дисциплина барлыҡҡа килде. Ғөмүмән, Көнсығыш көрәш төрҙәре үҙеңдең буйыңды нисек тотоуҙан башлап, уйҙарыңды, рухыңды ла ниндәй кимәлгә көйләргә кәрәклегенә өйрәтә. "Һинең һәр еңеүең һәм һәр еңелеүең иң тәүҙә аңыңда барлыҡҡа килә", тигән фекер бар. Шуға күрә, спорт менән шөғөлләнгән кешенең формаһы ғына түгел, эске донъяһы ла үҙгәреш кисерә. Әгәр кеше үҙенә маҡсат ҡуя икән, тимәк, уңышҡа өлгәште, тигән һүҙ. Үҙемә-үҙем, уҡырға кәрәк, тигән маҡсат ҡуйыу менән, 7-се синыфтан алып дүрт һәм биш билдәләренә генә өлгәшә башланым, 11-енсене бары яҡшы билдәләргә генә, ә институтты ҡыҙыл дипломға тамамланым. Тырышлығымды, өҫтәүенә спорт менән әүҙем шөғөлләнеүемде күреп йөрөгән уҡытыусыларым да кәрәк саҡта ярҙамға килделәр. Дәрестәремде ярыштар арҡаһында ҡалдырған хәлдә лә, һуңынан еренә еткереп, эшләнмәгән эштәремде төн йоҡоларымды йоҡламай эшләп ҡуя инем. Бөгөнгө көндә аспирантураның икенсе курсында уҡыйым. Фән менән шөғөлләнеү ҙә ҙур тырышлыҡ, ныҡышмалылыҡ талап итә. Спортсы холҡом тормошта ныҡ ярҙам итә. Әлбиттә, үҙемдең тәрбиәләнеүселәремә лә был турала йыш һөйләйем. Уларҙың көндәлектәрен һәр ваҡыт тикшереп торам. Әгәр кемдеңдер уҡыуы насарая башлаһа, дәрестәрен әҙерләргә, тип, өйөнә ҡайтарып ебәрәм. Минеңсә, спорт уҡыуға ҡамасаулай башлаһа, уның кәрәге "Өс тинлек ҡуян - биш тинлек зыян" әйтемендәгесә булыр ине. Спорт кешене бер яҡлы ғына түгел, ә комплекслы үҫтереүҙе күҙ уңында тоторға тейеш. Күп кенә тренерҙар быны яҡшы аңлай.

**Һөнәрең буйынса һин - юрист. Эшең менән спортты нисек берләштерәһең?**

-Мин иртәнге һигеҙҙән киске алтыға тиклем юрист булып эшләйем, ә алтынан һуң - тренермын. Ваҡытымдың күпселеге юрислыҡҡа сарыф ителһә, ҡалған ваҡытымды спортҡа бүләм. Эшем буйынса мин юрист, ә тормошта - һуғышсы, тип әйтергә лә була. Юристар тотороҡло, тыныс булырға тейеш. Кемгәлер тауыш күтәрергә ярамай. Бик ярһыған ваҡытта миңә ушу көрәшсеһенә хас түҙемлек ярҙамға килә.

**Һин өйрәткән спорт төрө тәбиғәте менән аяуһыҙ. Рингта һуғышҡан саҡта барлыҡҡа килгән нәфрәт ярыш бөткәс юғалһын өсөн тәғәйенләнгән күнекмәләр бармы? Балаларҙа дәғүәсегә ҡарата ихтирам тәрбиәләү ниндәйерәк ысулдар ярҙамында аткарыла?**

-Рингҡа сыҡҡан һәр спортсы өсөн еңеү фарыз. Ошо маҡсат уларҙы алға әйҙәй. Шуға күрә, хатта дәғүәсең иң яҡын дуҫың булһа ла, рингта осрашҡан ваҡытта уға ҡаршы торорға, дуҫыңа һөжүм итергә тура килә. Әлбиттә, һуғышҡанда барлыҡҡа килгән хистәр ярыш бөткәс тә онотола.

Ярышта иң ҙур оҫталыҡ - ҡаршы яҡты көтөлмәгән һөҙөмтә менән аптырашта ҡалдырыу, аҡыл ярҙамында еңеп сығыу. Әҙерлек буйынса өҫтөн сығыу һәм дөрөҫ тактика һайлау - ярты уңыш, ә рухи яҡтан көслөрәк булыу - тулы еңеү, тигән һүҙ. Оҫта спортсы рингта барыһын да күрһен өсөн иғтибарлы, шул уҡ ваҡытта сабыр булырға тейеш. Хәйләкәрлек тә ҙур ярҙам итә. Әммә был бер ҡасан да мәкергә әйләнергә тейеш түгел. Үҙ дәғүәсеңә ҡарата ихтирам тәрбиәләүҙе төрлө юлдар менән аткарабыҙ. Шуларҙың береһе - ололарға ололо ҡлап өндәшеү. Былар барыһы ла күнекмәләр ваҡытындағы һөйләшеүҙәр ярҙамында башҡарыла. Беҙҙең спортта уҡытыусыларға: "Һеҙгә мөрәжәғәт итергә мөмкинме?" - тип кенә өндәшәләр. Шулай уҡ бер ниндәй маҡсатһыҙ өндәшеү ҡәтғи тыйыла. Әгәр ҙә бик кәрәк икән, "Минең шундай тәҡдимем бар", - тип кенә һүҙ башлайҙар. Тағы ла, спорт төрө булараҡ башланыу тарихын, уға нигеҙ һалыусыларҙың биографияһын һөйләү ҙә кешелеклелек, кеселеклелек сифаттарын үҫтереүгә ярҙам итмәй ҡалмай. Сөнки Көнсығыш көрәш төрҙәре рухи яҡтан юғары кимәлдәге кешеләр тарафынан уйлап сығарылған. Был хаҡта легендалар ҙа бихисап. Ошондай ысулдар кешене тотороҡлораҡ итә. Был спорт төрөнөң ҡанундары менән халҡыбыҙ ҡанундары араһында уртаҡлыҡ та һиҙәм мин. Кунг-фу, кикбоксинг, муай тай, ушу кеүек көрәш төрҙәренең бик күп йылдар буйы формалашҡан үҙ нормалары барлыҡҡа килгән. Көнсығыш һуғыш оҫтаһы көслө генә түгел, ә аҡыллы ла булырға тейеш. Ысын һуғышсы аҡыл эйәһе кимәленә етеүҙе маҡсат итеп ҡуя һәм ғүмер буйы шуға ынтыла. Шәхесте үҫтереүгә ҙур этәргес бит был.

**Суворовтың "Тяжело в учении, легко в бою" тигән һүҙҙәре бар...**

-Күнекмәләрҙә тәрбиәләнеүселәремдән мөмкин тиклем күберәк алырға һәм мөмкин тиклем күберәк бирергә тырышам. Йәш кешенең һәләте бармы-юҡмы икәнлеге күнекмәләрҙә үк күренә. Спортсыларҙы мин ике төргә бүләм: һәләте менән алдырғандар һәм тырышлығы менән алдырғандар. Чемпиондар тәүгеләре араһында ла, һуңғылары араһында ла осрай. Шуныһы: һәләтлеләр, ғәҙәттә, тырыш булмай. Улар үҙҙәрен үҫтереүҙе маҡсат итеп ҡуймай. Һәләттең ҡәҙере шулай юғалып, белгәндәре тамам онотолоп та ҡуя. Ә кем ҡара тырышлығы ярҙамында уңыштарға өлгәшкән, шулар артабан да ҡанатын нығыта. Тырышҡан - тапҡан, ташҡа ҡаҙаҡ ҡаҡҡан, тиҙәр бит.

**Быйылғы Ҡуян йылы - һинең йылың икән, уға ниндәй өмөттәр бағлайһың?**

- Миңә яҙ айҙарында Аргентинала үтәсәк донъя чемпионатында ҡатнашыуға саҡырыу ҡағыҙы килде. Әлегә төп маҡсатым - донъя чемпионатында еңеү яулау.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Ҡара аждаһа"ларҙы ҡарап ҡайтҡас, үрмәксенән күрмәксе, тигәндәй, төрлө хәрәкәттәр яһап маташтым. Тик минең был хәрәкәттәр ысын хәрәкәттәргә пародияны ғына хәтерләтте шикелле. Ҡарап тороусы ҡустым рәхәтләнеп көлдө былай. Әле бәләкәй сағында ҡустымды ла "Ҡара аждаһа" кеүек берәй клубҡа йөрөтөргә ине, тип хыялландым. Әммә ауылда ундай клубтың асылыуын көтөп йөрөгәнсе, ул үҫеп етте. Ҡыҙғаныс, әммә бөгөн күптәр ниндәйҙер спорт төрө менән шөғөлләнергә теләп тә, быға мөмкинлек булмау арҡаһында... үҫеп етеп, ваҡытын уҙғарып ебәрә.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ



# САРМАТ АЛТЫНЫНЫҢ ВАРИҪЫ КЕМ?

## Фараздар киләсәктә иҫбатланыр

Ҡайһы бер сағыштырыу материалдары, Көньяҡ Уралдағы боронғо халыҡтың дини инаныуҙарының, шулай уҡ "Урал батыр" эпосының күп кенә идея-композиция сюжеттары боронғо әҙәбиәт, бәлки, ислам йоғонтоһо менән юғалтылһа ла, уларҙың ҡайһы берҙәрен ҡайтанан тергеҙеү мөмкинлеген бирә, тип раҫларға урын ҡалдыра. Әйтелгәндәргә бәйле һыу стихияһы хужаһы - Яйыҡхан образы ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра.

"Урал батыр" героик эпосында Яйыҡ образы Урал батырҙың улы, әммә тәбиғәтте үҙгәртеүсе сифаттарға эйә булған зат итеп күрһәтелә. Мәҫәлән, атаһының ҡылысы менән ул тауҙар яра, унан ажарланып ағып сыҡҡан һыу бөйөк Яйыҡ йылғаһы (хәҙерге Урал йылғаһы) үҙәнен яра.

Был сюжетҡа киңерәк аңлатма биреүгә хәҙерге алтайҙарҙың фольклорындағы һәм дини инаныуҙарындағы оҡшашлыҡ булышлыҡ итә. Атап әйткәндә, бөтә ҡоро ерҙе һыуҙары менән ҡаплап, уны яуыз көстәрҙән таҙартып, матурлығын кире ҡайтарыу һәләтенә эйә булған һыу хакимы - мифик герой Яйыҡхан алтайҙарға яҡшы билдәле. Яйыҡханды ризалатыу һәм уның яҡшы мөнәсәбәтенә эйә булыу өсөн алтайҙар йыл һайын уға арнап ҡорбан килтерә һәм ҡатмарлы йола үтәй. Был йолалар бик популяр була. Алтайҙар араһындағы әңгәмәселәребеҙҙең күбеһе был күренештең халыҡ араһында киң таралыу алыуын раҫланы.

Әммә килтерелгән миҫалда ҡайһы бер факттар бер-береһенә тап килмәй. Алтайҙа Яйыҡ тигән бәләкәй ҙә, ҙур ҙа йылға юҡ, ә Уралда тәрән Яйыҡ йылғаһы аға, әммә Яйыҡхан исемле һыу стихияһы хужаһы башҡорттарға таныш түгел, уға арнап башҡорттар ҡатмарлы йолаларҙы үтәмәй һәм ҡорбан килтермәй.

Ошо проблема хаҡында күп йыллыҡ уйланыуҙар алтайҙарҙа Яйыҡхан исемле һыу аллаһы хаҡындағы ҡуҙаллауҙарҙың Көньяҡ Уралдағы боронғо ҡәбиләләрҙә барлыҡҡа килеүе һәм уларҙың ошо дин системаһына инеүе тураһында һығымта яһауға этәрҙе. Был йәһәттән түбәндәге миҫалдарҙы ла килтерергә мөмкин. Башҡортостандың хәҙерге картаһында унлап Ыҡ йылғаһы бар. Улар, Башҡортостандағы төп топоним белгестәре раҫлауынса, боронғо Яйыҡ гидронимының хәҙерге варианты булып тора. Улар - Һаҡмар йылғаһының ҡушылдығы Оло Ыҡ, Кама ҡушылдығы - Ыҡ, Ока һәм Әй йылғаларының ҡушылдығы - Ыҡ. Был мәсьәләне өйрәнгәндә Көньяҡ Уралдағы йылғалар системаһы атамаларының йөҙҙәрсә йылдар дауамында этник составы буйынса төрлө халыҡтың ҡатмарлы йоғонтоһо аҫтында етди үҙгәрештәргә дусар булыуын күҙ уңында тоторға кәрәк. Әммә килтерелгән миҫалдар боронғо һәм урта быуаттар башында Яйыҡ һүҙе ҡулланылған гидронимдар киң таралған булыуын асыҡ күрһәтә, һәм был шул осорҙағы халыҡтан һыу хужаһы Яйыҡхан тураһында дини ҡуҙаллауҙарҙың ҙур әһәмиәткә эйә булыуы менән бәйләлер, күрәһең. Бында Ибн Фаҙланды (X быуат башы) хәтергә төшөрөү урынлы булыр. Ул тәбиғәт күренештәре (ҡыш, йәй, ямғыр, ел, ағастар, кешеләр, аттар, төн, көн, әжәл, ер, күк) хужалары булған 13 алла иҫәбенә "һыу хужаһы"н да индерә. Был исем аҫтында Яйыҡханды күҙ уңында тоторға кәрәктер, моғайын. Үрҙә билдәләнгән күҙәтеүҙәр дөрөҫлөккә тап килә икән (әлегә беҙ уларға альтернатива күрмәйбеҙ, шуға күрә уларҙы әүәлерәк бирелгән мәҡәләләрҙең береһендә ҡыҫҡаса һөйләп киткәйнек инде), хәҙерге алтайҙарҙың юғарыла һүрәтләнгән фольклор-дини сюжеты Көньяҡ Уралдан сыҡҡан Алтай ҡәбиләләре тарафынан ғәмәлгә индерелгәндер, тигән һығымта яһарға мөмкин. Тимәк, борон Көньяҡ Уралдың бер өлөшө, бәлки, башҡорт халҡы ла Алтайға күскәндер.

Хәҙерге алтайҙарҙың һыу стихияһы хужаһы - Яйыҡхан тураһындағы ҡуҙаллауҙары Көньяҡ Уралда, хатта боронғо башҡорттарҙа барлыҡҡа килеүе тураһындағы юғарыла билдәләнгән фараздар киләсәктә иҫбатланыр, тип ышанабыҙ. Беҙҙеңсә, был сюжет боронғо башҡорттарҙың Көньяҡ Урал биләмәһе менән бәйле булған тарихында мөһим яңы бит аса һәм уның ғилми әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ. Уҡыусының түбәндәгеләр хаҡында ла иҫкәртергә кәрәктер. Әйтелгәнсә, Көньяҡ Уралда дайыҡ ырыуҙарын сак, массагет, аргиппей, исседон, аримасп, ииркtар уратып алған була. Уларҙы боронғо авторҙар көтөү-көтөү малдары булған күсмә тормош алып барыусылар булараҡ тасуирлай. Уларҙың ҡайһы берҙәре (мәҫәлән, исседондар) кейеҙ ябылған дүрт һәм алты тәгәрмәсле арбаларҙа көн күргән. Был халыҡтарҙың бараһы ла Көньяҡ Уралдың таулы-урманлы райондарындағы ултыраҡ тормошта йәшәүсе халыҡ (ананьяа мәҙәниәте ырыуҙары) менән тығыҙ аралашҡан. Ошо факттарҙы иҫәпкә алғанда, мәҙәниәт, яйыҡтарҙың хужалыҡ тормошо һәм дини ҡуҙаллауҙары тураһында юғарыла әйтелгәндәрҙе дөйөм (йыйылма) юҡҡа иртә тимер быуаттағы төбәк ҡәбиләләренең дөйөм мираҫы булараҡ аңларға кәрәк.

## Бөтә донъя һоҡлана

Һәр хәлдә, хәҙерге башҡорттар мәҙәниәтендә үрҙә әйтелгән ҡайһы бер ҡәбиләләрҙең генетик эҙе анығ һаҡланып ҡалыуын билдәләүсе асыҡ дәлилдәр бар. Мәҫәлән, "исседондар" этнонимы Урта Уралдағы Исеть йылғаһы гидронимы (атамаһы) булараҡ һаҡланып ҡалған.

Ҡайһы бер антик авторҙар аргиппейҙарҙы "пеләш" булараҡ характерлай. Хәҙерге төркиәтсе-лингвистар "пеләш" һүҙен Дала Евразияһындағы күп һанлы күсмә ҡәбиләләр төркөмөнөң береһенең атамаһы булған боронғо грек һүҙе "таҙ" этнонимының хаталы тәржемәһе булараҡ ҡабул итә. Таҙ ҡабиләһе быуындарын этнографтар хәҙерге башҡорттар, ҡаҙаҡтар, үзбәк, ҡырғыҙ һәм Дала Евразияһының башҡа халыҡтары составында та таба. Шуны билдәләргә кәрәк: дини инаныуҙар системаһы, шул иҫәптән иртә тимер һәм урта быуаттар дәүерендә Көньяҡ Уралда ерләү йолаһы үҙенсәлектәре урта быуат башҡорттары фольклорында һәм ғөрөф-ғәҙәттәрендә сағыу эҙ ҡалдырған һәм әҙәбиәттә сағылыш тапҡан. Уларҙың һәр береһен һөйләү күп ваҡыт һәм урын алыр ине, шуға күрә улар үҙ ваҡытында тәүге тапҡыр "VII - XIV быуаттарҙа Көньяҡ Урал" тигән китабымдың (М., Наука, 1977) айырым бүлегендә дөйөмләштерелеүен билдәләү менән генә сикләнәйек.

Үкенес менән шуны әйтергә кәрәк: бер йыл элек донъя күргән башҡорт халҡы тарихының боронғо этаптарына арналған "Башҡорт халҡы тарихы"ның (М., 2009) тәүге томында әле билдәләнгән сығанаҡтар йәлеп ителмәгән һәм был китапта тик археологик артефакттар ғына бирелгән. Шул сәбәпле китаптың йөкмәткеһе уның атамаһынан ҡырҡа айырыла.

Иртә тимер быуаттағы Көньяҡ Урал ҡәбиләләре тураһындағы һүҙемде уларҙың тарихын өйрәнеүгә ҙур өлөш индергән ғалимдарҙың фекерҙәренә һылтанма менән тамамларға теләйем.

Күренекле ғалим-шәрҡиәтсе, академик В.В. Бартольд яҙыуынса, Рим авторы Птоломей (беҙҙең эраның II быуаты) картаһындағы Яйыҡ йылғаһы атамаһы датаһы анығ билдәләнгән боронғо төрки һүҙе булып тора. Тимәк, уның фекеренсә, дайыҡ ҡәбиләләре боронғо төрки телендә һөйләшкән. Ошо уҡ фекерҙе икенсе күренекле совет төркиәтсеһе СССР Фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы С.Е. Малов та хупланы. Ул иртә тимер быуатта Көньяҡ Урал ҡәбиләләренең боронғо башҡорт телендә һөйләшеүен иҫбатлаи.

Киң билдәле башҡорт ғалимы профессор Ж.Ғ. Кейекбаев үҙенең бер нисә фундаменталь хеҙмәтен ошо темаға арнай. В.В. Бартольд менән С.Е. Маловтың артынса ул, дайыҡ ҡәбиләләре һәм Көньяҡ Уралдағы уларҙың башҡа күршеләре боронғо башҡорт, йәғни төрки телендә һөйләшкән, тип раҫлай. Ҡаҙан төркиәтселәре - академик М.З. Зәкиев һәм профессор Ф.Г. Ғарипова, Рәсәйҙең башҡа билдәле ғалимдары шулай уҡ үҙҙәренең тикшеренеүҙәрендә ошо фекерҙе үҫтерә.

Беҙгә уҡыусыларҙы 1916, 1925 һәм 1955 йылдарҙа баҫылып сыҡҡан "Башҡорттар" китабының авторы, танылған археолог, этнограф, антрополог С.И. Руденконың фекере менән таныштырырға ҡала. Дала Евразияһы халыҡтарының боронғо тарихын һәм мәҙәниәтен тәрән белгән С.И. Руденко иртә тимер быуатында Көньяҡ Урал ҡәбиләләре (дайыҡтар, ииркtар, исседондар һәм башҡалар) хәҙерге башҡорттарҙың тура-нан-тура боронғо атай-олатайҙары булыуы хаҡында ныҡлы инаныи яҙа. Уның фекеренсә, был ҡәбиләләрҙә берҙәм боронғо башҡорт (төрки) теле, физик тип, хужалыҡ тормошо нигеҙендә берләштереү беҙҙең эраның тәүге быуаттарына тура килә, Көньяҡ Уралда унан һуң барған ҡатмарлы миграцион һәм башҡа процестар "башҡорттарҙың физик тибын да, телен дә, көнкүрешен дә үҙгәртмәгән".

Боронғо атай-олатайҙарыбыҙ сағыу һәм үҙенсәлекле мәҙәниәт ҡалдырған. Беҙҙең эраға тиклемге V - IV быуаттарҙа Филиппов ҡурғандарынан табылған алтын, көмөш, бронза, тимер һәм ағас әйберҙәр коллекцияһы - уның төп байлығы. Хәҙер уларға бөтә донъя һоҡлана. Һис шикһеҙ, уларҙың бер өлөшө Көньяҡ Уралға - боронғо башҡорттар иленә ул осорҙағы Фарсы (Иран), Хорезм (Урта Азия), Ҡаҙағстан ҡәбиләләре менән сауҙа-мәҙәни бәйләнештәр барышында эләгеп, башҡорт халҡының атай-олатайҙары мәҙәниәтенең айырылғыһыҙ өлөшөнә әүерелгән. Был донъя кимәлендә уларҙың юғары ижади мөмкинлектәргә эйә булыуына ныҡлы дәлил.

**Нияз МӘЖИТОВ,**
**БР Фәндәр академияһы академигы.**

**(Башы 3-сө һанда).**

АРҘАҠЛЫ БАШҠОРТТАР



Рәфис БАТЫРҠАЙ һүрәте.

# ҒИЛМЕТДИН СӘНЖАР ӘЛ-БАШҠОРДИ (XIII быуат урталары - XIV быуат аҙағы)

**Алтын Урҙа осоронда, бигерәк тә XIV быуат урталарынан, алыҫ ғәрәп иле Мысырҙа бер үк ваҡытта төрки телле фән һәм мәҙәниәт һиҙелерлек үҫеш ала. Һарайҙағы ҡаршылыҡтар, тәхет өсөн талаш-тартыш арҡаһында Урал, Волга, Яйыҡ буйҙарынан, Хәрәзмдән, Ҡырымдан бик күп ғалимдар, әҙиптәр Мысырға күсә. Үҙ сиратында Мысырҙа был дәүерҙә башлыса төркиҙәрҙән торған (уғыҙҙар, күберәк ҡыпсаҡтар) мәмлүктәр династияһы урынлаштырылған була. (Мәмлүк солтандары был илдә 1250 йылдан алып 1803 йылға тиклем хакимлыҡ итә).**

Алтын Урҙала урынлашҡан ҡыҫымға түҙә алмайынса йә башҡа сәбәптәр арҡаһында Мысырға йыш ҡына башҡорттар ҙа барып юлыҡҡан. Улар араһында юғары ҡатлам мәмлүктәренән Ғилметдин Сәнжар әл-Башҡорди менән Насретдин әл-Насыри үҙҙәрен дәүләт эшмәкәрлеге, ғилем һәм шиғриәт өлкәһендә танытҡан булғандар.

Ғилметдин Сәнжар әл-Башҡордиҙың Мысырҙа әмир булып торғанлығы билдәле. Уның исеме Әл-Фа-киһи тигән ғәрәп ғалимының "Мәккә тарихы"нда 1284 һәм 1290 йылдарҙағы ваҡиғалар айҡанлы телгә алына. Тәүге осраҡта ул: "Мәккәнең башлығы Эбүнума менән Мысыр әмире Ғилметдин Сәнжар әл-Башҡорди һүҙгә килештеләр, шул арҡала Эбүнума Мәккәнең ҡапҡаларын бикләтте һәм берәүҙе лә ҡалаға индермәне..." - тиелгән. Бынан ары китапта ошондай мәғлүмәт бирелә: "Мысырҙан хажға килеүселәр каруанының башы - Ғилметдин Сәнжар әл-Башҡорди ине".

**Рәшит ШӘКҮР.**
**"Арҙаҡлы башҡорттар" китабынан.**

***✓ Зәйнулла ишан: "Һин ошо ерҙә йәшәргә тейешһең!" - тип, ҡырт киҫә. Һуңынан күпме эҙәрлекләүҙәргә дусар булһа ла, олатаһы ҡушмаған, атайым Шығайҙан бер ҡайҙа ла китмәгән.***



# "Олуғ зат" шулай ти Зәйнулла ишан

**Ғәзиз еребеҙҙе әүлиәләр рухы төрлө афәттәрҙән, бәлә-ҡазаларҙан һаҡлап, ҡурсалап тора, тигәнде ишеткәнем бар. Күрәһең, күп йылдар элек аяуһыҙ эҙәрлекләүҙәргә дусар булған халҡыбыҙҙың аҫыл улдарының изге рухтары әле булһа ерҙәге үҙ тәғәйенләнешенә тоғро ҡала торғандыр. Шуға ла бөтә мосолман илдәрендә бөгөн дә оло ихтирам менән телгә алынған башҡорт шәйехе Ҡотоп Заман Зәйнулла Рәсүлевтың исеме үҙ илен, ерен, халҡын һөйгән һәр башҡорт күңелендә милләтебеҙҙең рухи етәксеһе булараҡ күҙалланыуы һис тә ғәжәйеп түгел. Заманында әллә күпме һөргөндәр үткән, төрмәләргә бикләнгән алдынғы ҡарашлы дин әһеленең яҙмышындағы фажиғәле биттәр тураһында күп уйланғаным булды. Шундай шәхестәрҙең шәжәрә тармаҡтарын тергеҙһәң ине. Кемдәр улар бөйөк әүлиәнең ейән-ейәнсәрҙәре, бүлә-бүләсәрҙәре? Ниндәй икән уларҙың яҙмышы? Билдәле ишандың көҙрәтһәләттәре уларҙа ла сағылыш тапҡанмы? Белорет районының Шығай ауылында йәшәүсе 80 йәшлек Сәүҙә ЭНИЕВА (Иҡсанова) инәй менән осрашыуымдың маҡсаты ошо һорауҙарға яуап табыу ине. Уның һөйләгәндәрен "Киске Өфө"нөң хәтеркитабына теркәп ҡуяйыҡ.**

## Атайым һәм әсәйем

Мин Зәйнулла ишандың бүләсәре. Атайымдың әсәһе Кәримә өләсәйем Зәйнулла ишандың ҡыҙы була. Ул бик иртә донъя ҡуя. Атайым Шәмсетдин өс йәшлек кенә сағында йәш ярымлыҡ Ғәләүетдин ҡустыһы менән етем ҡала. Кәримә өләсәйем үлгәс, Йософ олатайым бик уҫал татар ҡатынына өйләнә. Зәйнулла олатайым ейәндәрен йәлләп, уларҙы үҙенең тәрбиәһенә ала. Белем биреп, буй еткергәс, Шығай ауылына яңы мәҙрәсә һалдыртып, 1903 йылда атайымды шунда уҡытырға ебәрә. Бәләкәйҙән ҡалала үҫкәс, атайым тәүҙә ауыл ерен берҙә генә лә үҙһенмәй ыҙалай. Олатаһына Троицкиға ҡайтырға рөхсәт һорап, хат та яҙып ҡарай. Әммә Зәйнулла ишан: "Һин ошо ерҙә йәшәргә тейешһең!" - тип, ҡырт киҫә. Һуңынан күпме эҙәрлекләүҙәргә дусар булһа ла, олатаһы ҡушмаған, атайым Шығайҙан бер ҡайҙа ла китмәгән. Мин үҙем ҡайҙа барһам да Шығайҙы бик һағынып ҡайтам. Сит яҡта түҙмәйем, тыуып-үҫкән ерем үҙенә тарта.

Атайым менән әсәйемдең өйләнеү тарихы ла бик ҡыҙыҡ ул. Ауылдың хәлфәһе, ошо ҡыҙымды һинә бирәм, тип, 13 йәшлек Бибиәсмәне күрһәткәс, сәй эсеп ултырған ерендә атайымдың шәшкеһе төшөп киткән. Ҡаушағандыр инде. Шунан ул: "Юҡ, мин өйләнергә йыйынмайым", - ти. Һуңыраҡ икенсе бер мәжлестә Йософ олатайым ошо уҡ ҡыҙҙы күрһәтеп, "Улым, был ҡыҙ буй еткергән инде, үҙе ипле генә күренә", тип, тағы Бибиәсмәне кәләшлеккә димләй. Тик инде ҡыҙҙың ата-әсәһе ҡаршы төшә. Тәүҙә үк алмағас, үсеккәндәрҙер инде. Шулай ҙа тиҙҙән риза булып, үҙ фатихаларын бирәләр.

Атайым менән әсәйем шул тиклем татыу булдылар. Матур йәшәнеләр. Беҙ 12 баланан өсәү ҡалып үҫтек: Нажиә, мин һәм Мөнир туғаным. Дин әһелдәрен элек бик эҙәрләкләйҙәр ине бит. Атайымды ла ҡулға алып, Мурманскиға алып киткәндәр. Ун айлыҡ ҡына сағымда әсәйемде ошо өйҙән ҡыуып сығарғандар. Әсәйем мине зыяратҡа йәшереп, үҙе һаҙлыҡта ҡасып ултырып ҡалған гел һөйләр ине. Уны үгәй әсәһе Өммөкамал үҙ ышығына алған. Хәйер, улар үҙҙәре лә түбәлек аҫтында, урамда йыла торған булғандар. Йәшәгән өйҙәрен һүтеп алып киткәндәр. Олатайым менән атайымды һөргөнгә бергә ебәргәндәр. Ҡайным һүтелгән өйҙә күргәс, эй иланы, тип һөйләр ине атайым. Илар инде үҙ ҡулдары менән һалған өй булғас. Ай яҡтыһында әсәйем елөк йыйып, көндөҙ ризыҡҡа алыштырған. Көндөҙ колхозда эшләтәләр ҙә башҡаларҙы ашатҡанда быларҙы ашатмай ҡалдыралар икән. Өләсәйем үгәй булһа ла, беҙгә һәйбәт ҡараған. Рәхмәт инде уға! Урыны ожмахта булһын!

Ниһайәт, атайым һөргөндән ҡотолоп, төрлө михнәттәр менән Мурманскиҙан ҡайтып еткән. Ауыл ерендә төрлө һүҙ булғандыр инде. Төртмә телле бәгзе әҙәмдәр атайыма ҡара яғып та маташҡандар. Бер саҡ шундай наҙаҡ һүҙҙәрҙән илап ҡайтып ингәс, атайым менән әсәйемдең мине алдарына ултыртып алып: "Сәүҙә, беҙ бер ҡасан да бер-беребеҙгә лә, берәүгә лә хыянат итмәнек," - тип, әңгәмә алып барғандары иҫтә ҡалған. Атайым мине Кәримә өләсәйемә оҡшатып: "Әсәйемә төҫөң менән дә, холҡоң менән дә, йыуашлығың менән дә оҡшағанһың," - тип иркәләр ине.

Әсәйем ҡул эшенә оҫта булды. Теүәтәйҙәрҙе лә үҙе тегеп, ҡуҫҡарлап сигеп бирә ине. Теген машинаһын тартып алғастары, бөтә нәмәне гел ҡулдан текте.

Атайым ауылыбыҙҙа дини эштәрҙе алып барыусы ғына түгел, ғәйәт оло мәғрифәтсе ине. Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, ир-егеттәр атайымдан фатиха алып, ул яҙып биргән бетеүҙе тағып, яуға киттеләр. Атайым көндөҙҙәрен колхоз игенен киптерҙе, төндәрен келәт ҡарауылланы. Уны халыҡ бик ихтирам итә ине. Фронтҡа хәлдән килгәнсе ярҙам итәйек, тиһә, тыңлай инеләр.

1943 йылда кеше шул тиклем төшөнкөлөккә бирелгәйне. Атайым халыҡтың рухын күтәрер өсөн дини байрам үткәрергә булды. Туғаным менән икебеҙҙән ер өҫтөн ҡыҙҙырып, өшөгән картуф



йыйҙырттылар. Әсәйем шуның крахмалын һығып, ике ҡалаҡ он ҡушып, көлсәләр бешерҙе. Бер ҙә, балалар тамағынан айырам, тип уйламаған бит әле, халыҡтың күңелен күрәм, тип уйлаған. Ә кешеләр байрамдан сырайҙары үҙгәреп, йөҙҙәренә нур ҡунып таралды. Күҙҙәрендә өмөт осҡондары тоҡанды. "Абыстайҙың шул саҡта бешергән көлсәләре бик тәмле булғайны", тип, халыҡ бик оҙаҡ һөйләп йөрөнө. Мин дә уның тәмен иҫләйем. Күп йылдар үткәс, шундай ҡоймаҡты үҙем дә бешереп ҡарағайным, бер ҙә улай тәмле килеп сыҡманы.

Һуғыш йылдарында шулай алһыҙялһыҙ эшләүе, 42-46 градус һыуыҡтарҙа тышта ҡарауылда тороуы атайымды түшәккә ятырға мәжбүр итте.1957 йылдың май айында ул бик ҡаты ауырыуына ҡарамаҫтан, ғәйет хөтбәһен уҡып, вәғәҙәрен һөйләп, һуңғы тапҡыр ғәйет байрамын үткәрҙе...

## Ике мәҙрәсәле ауылым

Ирҙәр мәҙрәсәһе Шығайҙа электән булған. Яҡшылап уҡытырға кешеһе генә табылмаған. 1902 йылда Зәйнулла олатаһы һалдырған яңы мәҙрәсәгә атайым уҡытырға килгәс, эштәр йәнләнеп киткән. Бик һәләтле шәкерттәр өҫтәлгән. Араларында шиғыр яҙғандары ла булған. Атайым шәкерттәрен бик яратҡан. Шаярһалар ҙа тыймаған. Мәҙрәсәлә дини ғилем менән бер рәттән, иҫәпхисап, география кеүек фәндәр ҙә уҡытылған. Уҡыу әсбаптары менән атаһы ла, Зәйнулла олатаһы ла тәьмин итеп торған. Ауылға ылау менән 5-6 шкафлыҡ гәрәп, фарсы телдәрендәге китаптар ҡайтарылған. Атайымды ҡулға алғас, ҡырҡлап егетте ауыл зыяраты эргәһенә ҡыуып килтереп атҡандар. Нисәмә шәкерттең берәүһе генә иҫән ҡалған. Уларҙан илебеҙгә файҙа килтерерҙәй ниндәй генә зыялылар үҫеп сыҡмаҫ ине!

Атайым ғүмер буйы шуларҙы йәлләп, әсенеп йәшәне.

Мин әле йәшәп ятҡан йорт элек ҡыҙҙар мәҙрәсәһе булған. Уны әсәйемдең атаһы һалған. Олатайым тирә-яҡта танылған балта оҫтаһы булған. Уға атайымдың атаһы Йософ олатайым да аҡсалата ярҙам иткән. Ҡыҙҙар мәҙрәсәһендә әсәйем мөғәллимә булған. Тәүҙә үҙе атайымдан һабаҡ өйрәнә лә, һуңынан ҡыҙҙарҙы уҡыта икән. Һабаҡ биргән ҡыҙҙары ла шул үҙенә йәштәш тиерлек булғандыр инде. Бер мәл аңғармаҫтан ҡыҙҙар эргәһенә барып инһә, берәүһе быны эләкләп, башҡаларҙы көлдөрә икән. Әсәйем быны бик ауыр кисергән. Уға бит ни бары 14 кенә йәш булған. Шунан әсәйем өләсәйемә барып: "Ниңә мине уҡытмай, кейәүгә бирҙең? Мине ҡыҙҙар үсекләй," - тип, үпкәһен белдерә. Аҙаҡ ғүмер буйы "Әсәйемдең ғүмере былай ҙа ҡыҫҡа ғына булған. Ниңә генә әсәйемә ҡаты бәрелдем икән?!" - тип, шул ҡылығы өсөн үкенде.

Атайым менән әсәйем үҙҙәре лә ошо мәҙрәсәлә йәшәгән. Үрҙә әйткәнемсә, өйҙәренән ҡыуып сығарылғандан һуң бик күп йылдар үткәс кенә Мөнир ҡустым судлашып, ошо йортто үҙебеҙгә ҡайтарып алды. Әсәйем үлер алдынан минә ошо өйҙә ҡалдырып китмәскә васыят итеп ҡалдырҙы. Был өйҙән нигеҙенә Зәйнулла ишан өшкөрөп биргән ҡаҙауҙар ҡағылған бит.

## Ғабдрахман олатай

Зәйнулла ишандың бер нисә ҡатыны булған. Балалары ла күп кенә булған. Үкенескә ҡаршы, барлыҡ туғандарымды ла белеп бөтмәйем. Ҡайһы берҙәре менән хатлашып торабыҙ былай. Ә бына Ғабдрахман олатайҙың ғаиләһе менән бәләкәйҙән аралаштыҡ. Атайым уның менән бигерәк тә дуҫ булды. Гел хат алышып торҙолар. Тик хаттарҙы бер ҙә почта аша йөрөтмәнеләр. Гел кеше аша ғына биреп ебәрерҙәр ине. Әсәйем Ғабдрахман ишандың мөрите ине. Ҡулы оҫта булғас, остазына ҡулдәк тегеп кейҙереп ҡыуандырғанын да иҫләйем. Ғабдрахман Зәйнулла улы 1936-1950 йылдарҙа Башҡортостан диниә назаратында баш мөфтөй булған. Рәсәйҙең берән-бер мөфтөйө! Әүлиәлек һәләте лә көслө ине. Ғабдрахман ишан тураһында ишетеп, бер мәл Сталин уны үҙенә саҡыртып ала. Олатайҙың: "Тәүҙә хәүефләндем, әлбиттә. Ул саҡыртып алған кешеләр, ғәҙәттә, кире ҡайтмай бит. Лә иләһи илләалла. Вәләйһе тәүәкәлтә ғәләллаһа, тип уҡынып, барыһын да Хоҙайға тапшырҙым да ил башлығы янына индем," - тип һөйләгәне иҫтә ҡалған. Сталин уны фронт хәлдәре тураһында кәңәшләшергә саҡырған булған. Еңеүгә өмөтө уянған еткәс уға еңел машина бүләк иткән. (Был осрашыу тураһында Сәғит Исмәғилев яҙғанды янынан иғтибарығыҙға тәҡдим итәбеҙ - **Ред.**) Ғабдрахман ишан Сталиндан "Ислам дине" китабын баҫтырып сығарыуға, шулай уҡ Башҡорт кавалерия дивизияһы һалдаттары менән осрашыуға рөхсәт һораған. Сталин уның теләктәрен ҡәнәғәтләндергән. Ғабдрахман ишан Башҡорт кавалерия дивизияһы менән һуғыштың иң ауыр осоронда, һалдаттар күпләп ҡырылған ваҡытында осраша. Рәт араһынан үткәндә ул "Бында мин башҡорттарҙы күрмәйем" тигәс, уны оло һарайға алып инәләр. Һарай һалдат мәйеттәре менән тулы була, ишан улар янында ул-

***Әүлиәлек һәләте лә көслө ине. Ғабдрахман ишан тураһында ишетеп, бер мәл Сталин уны үҙенә саҡыртып ала. Олатайҙың: "Тәүҙә хәүефләндем, әлбиттә. Ул саҡыртып алған кешеләр, ғәҙәттә, кире ҡайтмай бит. Лә иләһи илләалла. Вәләйһе тәүәкәлтә ғәләллаһа, тип уҡынып, барыһын да Хоҙайға тапшырҙым да ил башлығы янына индем," - тип һөйләгәне иҫтә ҡалған. Сталин уны фронт хәлдәре тураһында кәңәшләшергә саҡырған булған. Еңеүгә өмөтө уянған еткәс уға еңел машина бүләк иткән. (Был осрашыу тураһында Сәғит Исмәғилев яҙғанды янынан иғтибарығыҙға тәҡдим итәбеҙ - Ред.) Ғабдрахман ишан Сталиндан "Ислам дине" китабын баҫтырып сығарыуға, шулай уҡ Башҡорт кавалерия дивизияһы һалдаттары менән осрашыуға рөхсәт һораған. Сталин уның теләктәрен ҡәнәғәтләндергән.***

# "НӘҪЕЛЕ БЕҘ"- бүләсәре Сәүҙә инәй

тырып, доғалар ҡыла. Шуны йөрәге әрнеп гел һөйләй торған булған. Йөрәк ауырыуын да шул осрашыуҙан алып ҡайтҡан инде ул. Ә инде 1945 йылда Сталин рөхсәте менән баҫтырып сығарған китап Советтар Союзында ислам дине буйынса баҫылған берҙән-бер китап була.

## Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!

Бәләкәйҙән уҡыуға отҡор булдым. Атайым менән әсәйемдең апайымды уҡырға өйрәткәндәрен күрәм дә, эй, рәнйейем. Мине яратмайҙар, ахырыһы, ратһалар, миңә лә өйрәтерҙәр ине, тип уйлайым. Әсәйемдең иң беренсе өйрәткән сүрәһе "Ихлас" ине. Ә хәреф танырға Аҡмулланың китабы аша өйрәндем. Шул тиклем ярата инем ғәрәп хәрефтәре менән яҙылған ошо китапты. Башынан аҙағына тиклем ятлап бөттөм. 9-10 синыфтарҙы Сермәндә уҡыным. Мине тәүҙә атайым Белорет педагогия училищеһына уҡырға алып барҙы. Директор менән завуч, "Бына, дин әһеле булһа ла, ҡыҙын үҙе алып килгән уҡырға", тип, хуплап ҡаршы алһалар ҙа, мине ыҙалатҡан, кәмһеткән уҡытыусылар ҙа булды. Ялға ҡайтҡанда Белореттан бер үҙем йүгерә-йүгерә ҡайтҡан булам. Бәләкәй генә икмәгемде ике туғаныма тотоп ҡайтам.

Китап ене ҡағылыуы Өфөгә китапханасылар техникумына алып килде. Баш ҡаланың Салауат урамында Ғабдрахман ишан йәшәгән 7-се һанлы йортто эҙләп таптым да инергә ҡыймай, баҫып торам. Ғабдрахман олатайҙың ҡыҙҙары өйҙә булған икән. Уратып ҡына һүҙ башлайым: "Шығайҙа бер туғanығыҙ бар икән!" Шул саҡ Нөләфәр: "Аһ, аһ, һин бит Шәмсетдин олатайҙың ҡыҙы! Атайыңа оҡшап тораһың да инде!" - тип ҡосаҡлап алды. Китапханасылар техникумында мин ихтирамлы мөнәсәбәт тойоп уҡыным. Бәлки, уның шулай булыуына Ғабдрахман ишандың йоғонтоһо ла булғандыр. Шулай итеп, мин хеҙмәт юлымды Шығайҙа китапханасы булып башланым.

## Балаларымды башҡорт итеп үҫтерҙем!

Беҙҙең яҡҡа репрессияға эләккән кешеләрҙе ағас ҡырҡырға ебәргәйнеләр. Шулар араһында Рамазан Эниев исемле бер чечен егете бар ине. Бәлки милләте буйынса чечен да булмағандыр ул. Чечняла йәшәгәндә күршеләре: "Һинең ирең чечен түгел. Аслыҡ йылдарында беҙҙең яҡта татарҙар үҙҙәренең балаларын һата ине. Ҡайның менән ҡәйнәңдең балаһы булманы, Рамазан һатып алынған бала! " - ти ине. Шул егеткә кейәүгә сыҡтым мин. Ул ни, миңә сыҡмаһаң, урлап алам, тип, артымдан ҡалмай йөрөнө. Үҙебеҙҙең ауыл егеттәре ялынып та, ялбарып та, асыуланып та ҡараны.

Кейәүгә сығып, бында бер аҙ йәшәгәс, Чечняға алып ҡайтып китте. Алхазурово тигән ерҙә торҙоҡ. Үҙҙәренә алып ҡайтҡайны, тормош иптәшем үҙгәрҙе лә ҡуйҙы, йәберләй башланы: бер ғәйепһеҙгә тибеп ебәрһенме, төртөп ебәрһенме... Бер ҡунаҡҡа ҡайтҡанымда Мәһәҙей ағайым Өфөгә тиклем беҙҙе оҙата килгәйне, шунда әйтте: "Кейәү, Сәүҙәне рәнйетһәң, мин һине үлтерәм! Мин - башҡорт! Һуғышта ниместе үлтергән кеше! Һиңә генә көсөм етер!" Шунан бер аҙ баҫылды ул. Үҙҙәрендә лә ҡыйын ине Рамазанға. Унда бит чечен булмаһаң, йәшәп булмай. Чечендарҙың: "Нисек итеп башҡорттар һине бушлай Рамазанға тотторop ебәрҙе ул? Беҙҙә булһаң, был төҫ-киәфәтең менән бик ҡыйбат торор инең: етмәһә, ғәрәпсә лә, урыҫса беләһең..." - тип аптырағаны иҫта ҡалған.

Чечняла миңә башланғыс синыфтарҙы уҡытырға бирҙеләр. Мәктәп директоры Тамара Хасановна: "Маленькая, шустрая," - тип, мине бик ярата ине. Бер заман уҡытҡан класымда 36 бала урынына 46 булып киткән. Гел минең класҡа килергә тырышалар ине. Бергә эшләгән коллегаларым: "Сәүҙә Шәмсетдиновна, һеҙ чечен балаларын ратаһығыҙмыни?" - тип һорап та ҡуялар ине. Бәлки, һынап та әйткәндәрҙер. Балалар ни, барыһы ла бер инде ул. Уларҙы нисек яратмайһың. Үҙебеҙҙең өс балабыҙ булды: Роза, Рушан, Ғабдрахман. Иремдең тыуған яҡтарында 8 йыл торҙоҡ. Бер саҡ Нажиә апайым менән еҙнәм ҡунаҡҡа килделәр ҙә: "Был яҡта беҙ 8 йыл түгел, 1 йыл да тормаҫ инек!"- тип ҡайтып киттеләр. Илашып хушлаштыҡ. Миңә ни, етә ҡалды. Үҙемдең дә һағыныуҙарым үҙәгемә үткәйне. Күп уйлап тормай, ул саҡтарҙа мәғариф министрлығында эшләгән Бикә Таһироваға эш һорап хат яҙҙым. Тиҙҙән унан ыңғай яуап килде. Нажиә апайымдан, "Әсәйең ныҡ ауырый", тигән телеграмма һуҡтырттым. Бер ни һиҙмәгән Рамазан үҙе үк мине Грозныйға тиклем илтеп ҡуйҙы. Балаларымды ла сит милләткә ҡалдырманым. Алимент та юллап маташманым. Үҙем үҫтерҙем.

Башҡа кейәүгә сығып торманым. Һоратыусылар булһа ла күңелем тартманы. Әсәйем дә: "Һин ир менән тора белмәйһең, Сәүҙә! Башҡа йөрөмә!" - тип әйтте. Рамазан үҙе йыл һайын килеп йөрөнө. Килгәнендә: "Әсәйегеҙҙе кейәүгә бирмәгеҙ!" - тип, балаларҙы ныҒытып китә ине.

Ҡайтҡаныма үкенмәйем. Балаларымды ысын башҡорт итеп үҫтерҙем! Һеҙ олуғ заттан, үҙегеҙҙе матур тотоғоҙ, тип өйрәттем. Аллаға шөкөр, балаларым йөҙөмә ҡыҙыллыҡ килтермәне.

## Ишанлы ил - көслө ил!

Атайым көслө хәҙрәт ине. Дауалаһа, кеше йүнәлмәй ҡалмай ине. Үләндәр менән дә дауалай белде. Әсәйемде лә өйрәтте. Мин дә өшкөрһәм, име килешә. Әммә был эш менән шөғөлләнергә яратмайым. Бик ыҙалаған кешегә генә ярҙам итеп ебәрәм

Атайымдың ҡәберенә зыярат ҡылып, рухын ололаусылар әле лә бар. Мин үҙем дә яңыраҡ, ниһайәт, Асҡарҙа йәшәгән Рәхилә киленем ярҙамында Троицкиға барып, Зәйнулла олатайымдың ҡәберенә зыярат ҡылып ҡайттым. Олатайым рухына әбйәлилдәр ике ҡорбан салдырҙылар. Мәсеткә ингәс, бөйөк ишандың бүләсәре килгән, тип, ҡулыма олатайымдың таяғын тотторҙолар. Мине ошо сәфәргә алып сыҡҡан кешеләргә мең рәхмәтлемен.

Суфыйҙар нәҫеленән булыуым менән ныҡ ғорурланам. Һинең ҡылған ғибәҙәтең менән Аллаһы Тәғәлә риза булһа, итәғәтең, буйһоноуың менән бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғәләйһиссәләм риза булһа, ә үҙең менән бөтә мәхлүҡтәр, шул иҫәптән хайуандар ҙа риза булһа, һин суфый инде. Бәләкәйҙән намаҙҙамын. 3-сө класта ғына уҡығанмындыр, бер мәл мәктәптә өйлә намаҙын уҡырға булып киттем. Өйгә ҡайтып өлгөрмәгәнмендер инде, күрәһең. Уҡытыусым намаҙымдың тамамланғанын көтөп ултырҙы ла, һаҡ ҡына итеп: "Сәүҙә, намаҙҙы ҡартайғас уҡырһың, йәме!"- тип ҡуйҙы. Күңелемде ҡалдырмай ғына әйтте былай. Шулай ҙа һуңынан күп йылдар тик иртәнге намаҙҙы ғына уҡып йөрөнөм. Әле Хоҙайға мең шөкөр, барыһын да уҡып барам. Әбейһәбей үҙ-ара ҡунаҡҡа саҡырышһаҡ, "Сәүҙә, һин нисек улай һаман да төҙ генә килеш йөрөйһөң ул?" тип аптырашҡан булалар. Ғүмер буйы намаҙ уҡыным, шуға төҙмөн, тим. Ураҙаны ҡалдырмай тотам. Араҡы кеүек нәмәне бер ҡасан да ауыҙыма алманым. Эскән ҡатын-ҡыҙҙы күрһәм, йөрәгем һыҙлай. Ни тиклем ҡыйынлыҡтар күрһәк тә беҙ бит юғалып ҡалманыҡ. Ниңә эсәләрҙер инде?

Һуңғы йылдарҙа йыш ҡына Шаһи Ямалетдиновтың әсәһе Диңгеҙ инәйҙе иҫкә төшөрәм мин. Ундай ҡатын-ҡыҙҙар юҡ бит ул хәҙер. Аҡыллы, аҙ һүҙле, түбәнселекле ысын башҡорт ҡатыны ине ул. Бөтә ҡатындарҙан да айырылып тора ине. Шул хаҡта гел уйлайым: ҡайҙан килен булып төшкән икән ул Диңгеҙ инәй? Уның улы һуғыштан Советтар Союзы Геройы булып ҡайтҡан Шаһи Ямалетдинов атайыма гел рәхмәтле булды. Ямалетдинов колхоз рәйесе булып эшләне, үҙе атеист булһа ла, "Һүҙ теймәһен, намаҙҙарығыҙҙы йәшенеп кенә уҡығыҙ", тип, халыҡты ҡурсалап торор ине. Халыҡ барыбер ҡорбан да салдырҙы, ғәйет намаҙҙарын да уҡыны. Мәсеттә вәғәздәр ҙә һөйләнелә ине. Ауыл халҡы ла тәрбиәле булды, эске юҡ ине. Шуға ла һуғыш йылдарында артта ҡалған колхоз тиҙҙән миллионер колхозға әйләнде.

Бөгөн дә Башҡортостаныбыҙҙың һәр төбәгендә ил-еребеҙҙе ҡурсалап торорҙай, халыҡтың рухын күтәрерҙәй башҡорт ишандары булһа, беҙ ни тиклем көсәйер инек. Беҙҙе ҡурсалап торған әүлиәләребеҙ, шул иҫәптән Зәйнулла ишандың рухы ла шат булыр ине.

**Зөлфиә ХАННАНОВА яҙып алды.**

ХОҘАЙ МӨҒЖИЗӘЛӘРЕ

# "НИ ШАГУ НАЗАД!"

## Был фарман нисек яҙылған?

**1942 йылда Сталинға, Аҡһаҡ Тимерҙең мавзолей-ҡәберен асыу һуғыш башланыуға сәбәпсе булған, тигән мәғлүмәт еткерәләр. Йәш сағында дини белем алған Сталин был хәлгә осраҡлы күренеш тип ҡарамай һәм тәрән борсолоу кисерә.**

Сталин бөйөк хәрби етәксе Аҡһаҡ Тимерҙе ҡайтанан ерләү, мавзолейын тәртипкә килтереү өсөн 1 миллион һум аҡса бүлергә фарман бирә, шунда уҡ консультация өсөн Ислам диненән тәрән белгән берәр инсанды табып килтерергә бойора. Ярҙамсылары Сталинға башҡорт халҡының рухи короле Зәйнулла ишандың улы мөфтөй Абдрахман хәҙрәт Рәсүлевтың кандидатураһын тәҡдим итә. Был хаҡта Асҡын районының Ҡашҡа ауылында йәшәүсе 85 йәшлек Ғәйзуллин Әғзәм Ғәйзулла улы һөйләгәйне. Әғзәм Ғәйзуллинды ул төбәктә ололап, хөрмәтләп Аҡ бабай тип атап йөрөтәләр. Уға илебеҙҙең барлыҡ төбәктәренән тиерлек кәңәш, башлаған эштәренә фатиха биреүен һорап киләләр. Аҡ бабай Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан, күп тапҡырҙар яраланған, яуҙа уң ҡулын юғалтҡан. Ул йәшлегендә бик күп арҙаҡлы мосолмандар, шул иҫәптән Зәйнулла ишан Рәсүлев әл Нәҡшбәндиәнең улы Абдрахман Рәсүлев менән дә таныш була. Аҡ бабай һөйләүҙәре буйынса, 1946 йылда ул хәрби госпиталдә ауыр яраларын һауыҡтырып, тыуған яғына ҡайтып килгәнендә Европа һәм Себер мосолмандары дини идаралығы мөфтөйө Абдрахман хәҙрәткә һуғыла. Хәҙрәт уға бик ҡыҙыҡлы ваҡиға хаҡында бәйән итеп, 1945 йылда донъя күргән "Ислам дине" тигән китап бүләк итә.

Хәҙер теге ваҡиға хаҡында. 1942 йылда фашистар Волгаға яҡынлай. СССР бик ауыр хәлдә тороп ҡала, сөнки Гитлер Волгаға үтә ҡалһа, быҒаса нейтралитет һаҡлаған илдәр фашистар яғында Советтар Союзына ҡаршы һуғышырға әҙер тора. Бына шундай саҡта Абдрахман хәҙрәт Юғары хәрби командующий И. В. Сталиндың ставкаһына килтерелә. Сталин хәҙрәткә Икенсе донъя һуғышының артабанғы ваҡиғаларын нисегерәк күҙаллауы хаҡында һорау бирә. Абдрахман хәҙрәт Сталиндың биргән һорауына яуап биреү өсөн төндә махсус истихар намаҙы башҡарырға, шунан һуң Аллаһы Тәғәләнең яуабын ишетер өсөн ятып йоҡларға тейешлеге хаҡында белдерә.

Истихар намаҙын уҡығас, хәҙрәт йоҡларға ята һәм төш күрә. Төшөндә Аллаһы Тәғәләнең, совет ғәскәрҙәре тағы ла бер аҙымға ғына сигенһә, һуғыш Гитлерҙың еңеүе менән тамамланасағы хаҡындағы иҫкәртеүен аңғара. Иртәгәһен хәҙрәт Сталинға төшөндә күргәндәрен һөйләп биргәс, Юғары хәрби командующий тарихта "Ни шагу назад!" тип аталған киң билдәле директиваһына ҡул ҡуя.

Ошо ярҙамы һәм СССР мосолмандарын фашизмға ҡаршы изге һуғышҡа әйҙәгәне өсөн Сталин Абдрахман хәҙрәткә ярҙам йөҙөнән дин тотоусыларҙың йолаларын башҡарыуҙа бер аҙ ташламалар яһай, ошо юҫыҡта 1945 йылда "Ислам дине" тигән китап сығарырға рөхсәт бирә. Әйткәндәй, был китап Сталиндың Указы буйынса сығарылған берҙән-бер дини китап иҫәпләнә.

"Һеҙ Аллаһы Тәғәләнең мәрхәмәтен тойғанығыҙ булдымы?" тип һораным мин Аҡ бабайҙан. "Аллаһы Тәғәләнең иң ҙур мөғжизәһе - Уның барыбыҙға ла мәрхәмәтле булыуында. Ә һуғышта иһә Аллаһы Тәғәлә миңә атыусы немец снайперының йөрәгенә шул мәрхәмәтлекте индерҙе, ул мине атып үлтермәне, ҡулымды ғына яраланы...", тип яуапланы ул.

**Сәғит ИСМӘҒИЛЕВ.**

КИТАБЕННАС

# ӨС ЙӨҘ ҘӘ ӨС ХӘҘИС

Беҙ Ҡөрьән Кәримде, изге хәҙистәрҙе белмәй үҫтек. Ҡөрьәндең иң изге китап икәнен, әлбиттә, бәләкәстән күңелебеҙгә һалғайнылар. Хәҙис һүҙен иһә яҙа-йоҙа ғына ишеткеләһәм дә, тулы мәғәнәһен ныҡлап аңламай инем. Дини китаптар, ниндәй бөйөк рух донъяһы беҙҙең өсөн бикле булып, тыйылған булып ҡалды.

Күпме йылдар буйы тормошобоҙҙан көсләп айырылған Ҡөрьән, ниһайәт, күңелдәребеҙгә әйләнеп ҡайта башланы. Был изге китаптың башҡортса тәфсире баҫылып сығыу башҡорт милләтенең тормошонда ғына түгел, бөтөн мосолман донъяһында тарихи ваҡиға ул.

Йорттарыбыҙға дини китаптарҙың әйләнеп ҡайтыуы, мәсеттәрҙең төҙөлөүе, мәҙрәсәләрҙең асылыуы йәшәүебеҙгә яңы мәғәнә өҫтәй, тормошобоҙҙо нурлыраҡ итә.

Хәҙистәр менән таныша башлай алыуым яҙмышымдағы иң ҡыуаныслы ваҡиғаларҙан ул. Әгәр ошо бәхеткә насип итмәһә, был яҡты донъяларҙа ниндәй хазинанан мәхрүм хәлдә йәшәгән булыр инем. Аллаға шөкөр, ғүмер юлым был аҡыллы фекерҙәр, изге кәңәштәр, иң кешелекле теләктәр донъяһын урап үтмәне. Яңы быуат, яңы мең йыллыҡ минең өсөн бөйөк хәҙистәр менән башланды. Уларҙы мин тәү тапҡыр уҡып түгел, ишетеп белдем. Беренсе тыңлағанда уҡ был хикмәтле һүҙҙәр күңелемде арбаны, зиһенемә уйылып ҡалды. Уларҙы эҙләп табырға, күберәк уҡырға тырыштым. Хәҙистәрҙе шиғри юлдарға һалыу теләге нығына барҙы.

Русса ла, татарса ла хәҙис китаптары сыҡҡылай, әммә башҡортса тупланмаһы бөтөнләй юҡ. Тормошомдо нурландырған мәрхәмәтле теләктәрҙе, аҡыллы фекерҙәрҙе шиғри юлдарға теҙеп, туған телемдә уҡыусыларға ла еткергем килде.

Бөгөнгө ҡатмарлы һәм аяуһыҙ дәүерҙә төрлө яманлыҡтар кешене унын сабый сағынан уҡ аңдып торғанда, ергә тик яҡшылыҡтар өсөн яратылған әҙәм балаларының күңелен күпме алдатҡыс әүрәткестәр нисек тә аҙҙырырға тип шашынғанда, бөйөк Ислам нуры, бәйғәмбәребеҙҙең изге кәңәштәре беҙгә юлыбыҙҙа көс һәм ышаныс өҫтәһен, иманыбыҙҙы нығытһын ине. Хәҙерге һәм киләсәктәге ауыр һынауҙарҙы диндәштәребеҙ һәм милләттәштәребеҙ менән, бер-беребеҙгә таяныс булып, бергә ихлас тупланып, тоғролоҡ һәм намыҫ менән үтергә, мөҡәддәс маҡсатты-рыбыҙға етергә яҙһын ине.

**Рауил БИКБАЕВ.**

1
Олуғлығым, ризалығым өсөн
Кем татыулыҡ, һөйөү телэгән -
Һәммәһен дә бөгөн, уттай көндә
Ҡаплап торор минен күләгәм!

2
Мин бит һөйәм барсағыҙҙы,
Мине һөйһәң, кешем, ҡолом,
Мин булырмын һаҡ ҡолағың,
Күрер күҙең, һуҙыр ҡулың,
Булырмын йөрөр аяғың,
Саф күңелең, ғәзиз телең.

3
Мин һыймайым ерҙәремдең,
Күктәремдең ҡосағына,
Һыям ҡолом күңеленә,
Иман килтергән сағында.

4
Миңә биш илегә яҡынайғанға
Терһәк буйы яҡынайырмын.
Миңә терһәк буйы яҡынайғанды
Ҡолас буйы яҡын ҡылырмын.
Миңә атлай-атлай килгән йәнгә
Ашыға-йүгерә ҡаршы барырмын.

5
Был заманды һүгеп, бәндә, мине
Үпкәләтмә. Ваҡыт - мин үҙем.
Әмеремдән башҡа тағы кем һуң
Көндө төнгә шулай әйләндерер,
Яҙмыш - ғүмерҙәрҙе кем өҙөр?

6
"Аллаһынан башҡа һис тәңре юҡ", -
Был уй ҡәлгә кеүек нығ торор.
Ошо нығытмама ингән кеше
Яза-ғазабымдан ҡотолор.

7
- Эй Әҙәм балаһы! Миңә
Мин ауырып яткан саҡта
Килеп хәлем белмәнең?
Эсеремә һорағанда
Тамсы һыу эсермәнең.
Ашарыма һорағанда
Тәғәм ризыҡ бирмәнең.

Әйтте бәндә:
- Ник улай һуң?
Һин бит үҙең, эй, илаһи,
Ғәләмдәрҙең хужаһы!

Әйтте Аллаһ:
- Анау кеше
Ауырып, зарығып ятҡанда
Барып хәлен белмәнең.

Эсеренә һорағанда
Тамсы һыу эсермәнең.
Ашарына һорағанда
Тәғәм ризыҡ бирмәнең.

Белгән булһаң унын хәлен,
Биргән булһаң хаҡ-кәҙерен,
Булыр инең минең алда,
Артыр ине сауап-әжерең.

8
Мин аҡһаҡты бар яһаным -
Аяҡлыға булһын һабаҡ.
Мин сулаҡты бар яһаным -
Зарланмаһын ҡуллы ҡабат.

Мин күҙһеҙҙе бирҙем ергә -
Күҙ ҡәҙерен белһен күҙле.
Мин телһеҙҙе бирҙем ергә -
Һүҙ ҡәҙерен белһен һүҙле.

Бәндәләрҙән ҡаҙҙырамын
Бәндәләргә гүр-ҡәберҙе.
Бәлки, шул саҡ ҡәҙерләрҙәр
Нур ғүмерҙе, изге ерҙе.

9
Эй Әҙәм балаһы! Күпме
Гонаһтарың иңендә.
Улар болотҡа ашһа ла,
Ғәфү үтенһәң минән,
Итермен ғәфү, ҡолом,
Баҫылыр борсолоуым.

10
Был динде мин үҙем һайлап алдым,
Тиңләшерлек уға иман юҡтыр.
Хаҡ динемде нығытыр көс бары
Күркәм холоҡ менән йомартлыҡтыр.

11
Доға ҡылғанында, эй ҡолом,
Иң хаҡ нәмә - миңә тоғролоҡ.

12
Әҙәм балаһы! Әмеремә
Булдың һин ғәмһеҙ, хас туң.
Киҫәтһәм дә туктаманың,
Ярланым, ә һин ҡастың.

Мин һинән ваз кискәнемдә
Иғтибар ҙа итмәнең.
Үҙең зарланып илайһың,
Саҡ һыҙлар булһа тәнең.

Эй һин, кем тәккәббер ҡарай,
Саҡ-саҡ һауыҡып алһа!
Эй һин! Кем ҡол әйтһә - саба,
Ҡарыша - әйтһә Аллаһ.

АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО




## Снимай носки!

Интернатта таҙалыҡҡа бик ныҡ иғтибар бирелде. Балаларҙың һаулығын нығытыу ҙа ситтә ҡалманы. Һәр иртә физик күнегеүҙәр яһала, бер кем бынан ситтә тороп ҡалмай. Ә кискеһен билдәләнгән "санитар" менән "командир" таҙалыҡты тикшерә: аяҡтар таҙамы, тырнаҡ етмәгәнме, һ.б. Бер көн бөтә малайҙарҙы тикшергәндә Вәлиҙең аяғында ҡара ойоғо сиселмәгән була. "Командир" малай уға: "Снимай носки!" - тип урыҫсалап ҡыҫҡыра. Ә теге ойоҡтарын ялпылдатып күрһәтә лә: "Систем, бына ҡулымда", - тип яуаплай. Ҡараһалар, аяғы касар бысаҡ менән ҡырып йыуырлыҡ. Сәбәбен һорағас, ҡарыулашмай ғына аңлата: "Мунсала мин йыуынмайым, ялҡау килә, аша ҡойонам да сығам". Әйҙә китә көлөү. Шунан аҙаҡ үҙен "ҡара тояҡ" тип йөрөттөк. Әле лә осрашҡанда шуны иҫләп көлөшәбеҙ. Аҙаҡ Вәлиҙе мунсала ҡарап тороп йыуындырҙылар. Көлкө ҙур көс шул, таҙалыҡҡа ла өйрәтә.

## Алмас-ҡурмас

Әминә ғаиләлә берҙән-бер ҡыҙ. Үҙе аҡыллы, уйлап, сағыштырып һөйләй белә, тырышып уҡый. Бер көн ул ныҡ сирләп китте. Әсәһе Белорецка дауаханаға алып барҙы. Анализ бирергә булғас, ҡыҙ кис тә, иртәнсәк тә ашаманы. Дауаханала тотҡарландылар. Әсәһе йөрөп килде лә: "Алмас ағайың да бында дауаланып ята икән", - тине. Ҡыҙ өндәшмәне. Бер аҙҙан әсәһе тағы ла: "Һине лә ятырға ҡушһалар, Алмас ағайың эргәнә инеп йөрөр, күңелһеҙләнмә",- тине. Ҡыҙ ҡысҡырып илап ебәрҙе лә: "Әйтмә шул Алмас тип, ҡурмас булып иштелә, асмын дабаһа, бөтә нәмәне лә ашар инем", - тимәһенме. Ашауға һайлансыҡ ҡыҙ аш ҡәҙерен белгәндәй була. Эргәләгеләр рәхәтләнеп көләләр. Көлкө - баһадир, йәшәргә лә, аш ҡәҙерен белергә лә өйрәтә шул.

## Аяҡ осонда йөрө, үҫерһең

Шул уҡ интернат. Фәрит менән Марат дуҫтар. Фәрит үтә оҙон, Марат унын биленән генә. Үҫмәүенә Марат ҡайғыра, төрлө күнегеүҙәр ҙә яһай. Бер көн тәрбиәсе янына килеп: "Апай, нисек кенә оҙон булып үҫәйем икән, үҫмәһәм, ҡыҙҙар көләр бит", - тип уфтана. Тәрбиәсебеҙ Йыһан апай ҡарап тора ла, ни әйтергә белмәгәндән генә: "Һин көн буйы аяҡ осонда йөрө, кискеһен буйыңды үлсәй бар", - тип кәңәш бирә. Аҙна-ун көн үткәс, Марат апайға килеп: "Ысынлап та үҫә башланым, биш сантиметрға оҙонайғанмын", - ти. Бәләкәй булғас ни, бөтәбеҙ ҙә "кейеҙ бейәләй" тип көлә инек үҙенән, ғәрләнгәндер инде. Осраҡлы хәл булдымы, апайҙың кәңәше ярҙам иттеме, уҡыуҙар тамамланыуға Маратыбыҙ иң оҙон малайға әйләнде. Матур кәңәш менән дуҫтарса көлөү кешене лә үҫтерә икән, тигән фекергә килдек.

## Мәхтүмә апай ҡабалана

Мәхтүмә апай географиянан уҡыта. Үҙе үтә өтөк, үтә ҡабалан. Картала эшләргә ныҡ өйрәтте беҙҙе. Уның эшкә килгәндә лә оса яҙып, ҡабаланып йөрөгәнен беләбеҙ. 3-4 ҡыҙ һөйләшеп, уның юлында төрлө аралыкта көтөп торабыҙ. Күренеү менән юлына сығып: "Һаумыһығыҙ, Мәхтүмә Исламовна!"- тибеҙ. Ә ул: "Йөрөмәгеҙ әле бимазалап, былай ҙа ҡабаланам!"- тип, китеп бара. Мәктәп ихатаһына ингәнсе беҙҙең һаулыҡ һорашыу уны оҙата бара, ә уның ябабы - бер: "...былай ҙа ҡабаланам". Ул инеп киткәс, тәгәрәп йөрөп көләбеҙ, йәнәһе, апайҙы ҡыҙыҡ иттек. Бала саҡта ни, һәр нәмәнән көлкө эҙләйһең. Бер һүҙгә - мең һүҙ, тигәнең Мәхтүмә апайға тура килә инде.

## Эреләнһәң - һемәйтерҙәр

Ғәлим ағай ғүмер буйы шофер булып эшләне. Күпме кешене ташыны ул тирә-яҡҡа: ҡунаҡҡа ла, туйға ла, баҙарға ла. Бер көндө ҡатыны ла баҙарға бара. Ире уға, эше бөткәс, туҡталышҡа килеп, ҡулын күтәреп торорға ҡуша. Нәғимә енгә туҡталышҡа килә лә, эре генә бөйөрҙәренә таянып тора, йәнәһе, шофер бисәһе, ире танырға тейеш. Машина жыйтлатып үтеп тә китә. Енгә тура килгән машинала ҡайтып төшә лә ирен ҡыҙҙыра башлай. Уныны: "Әйткәнде тыңла, эреләнмә икенселәй", - тип ҡырт киҫә. Ысынлап та, эреләнһәң, һемәйтәләр шул.

## Кинйәһенең исемен онотҡан

Хәйҙәр ағай менән Шәмсиә апайҙың 7 улы, 3 ҡыҙы булды. Кинйәһе - Ҡадиры тыуғас, ағай ауыл советына уны яҙҙырырға китә. Тик туғыҙ балаһының исемен хәтерләй, һуңғыһыныҡын онота ла ҡуя. Кире ҡайтып, йортона ингәс, уйлап барған исеме иҫенә төшә һәм ул "Ҡадир!" тип ҡысҡырып ебәрә. Шулай шул, балаң әҙ булһа ла, күп булһа ла, хәтер ныҡ булырға тейеш.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ, "Башҡорт юморы" китабын бергәләп яҙайыҡ, тигән саҡырыуыбыҙ үҙ көсөндә ҡала, йәғни "Алдар менән Ерәнсә ҡоро", "КөлкӨфө" рубрикаларында баҫылған ҡыҙыҡ хәлдәр һәм мәҙәктәр конкурсы быйыл да дауам итә. Халҡыбыҙ телендә ләҡәп булып киткән төрлө ҡыҙыҡлы хәлдәр, тапҡырлыҡты, сослокто сағылдырған мәҙәктәр бихисап. Һәр ауылда, һәр төбәктә аяҡлы кәмитселәр ҙә йәшәп ята. Бына шуларҙы иҫегеҙгә төшөрөп, яҙып ебәрегеҙ беҙгә. Көтәбеҙ.**

ИЖАДХАНА

**"Был донъяла һәр кем үҙенән һуң файҙалы, изге эштәр ҡалдырырға тейеш", - тигәйне әңгәмәбеҙ ваҡытында эстрадабыҙҙың сағыу йондоҙо, балалар өсөн дә, ололар өсөн дә йөҙәрләгән йырҙар яҙыусы автор Гөлдәр Ишҡыуатова. Уйҙары изге, күңеле саф булғанға күрә дуҫтары ла күп, тамашасылары ла ярата үҙен. Быны күптән түгел булып үткән "Моңом булып кил" тип аталған концертында тамаша залының халыҡ менән шығырым тулы булыуы, һәр сығыштан һуң аяғүрә тороп ҡул сабыуҙар иҫбат итте лә инде. Гәзит уҡыусыларға Гөлдәрҙең үҙе, тормош һәм кешеләр тураһында фәлсәфәһе ҡыҙыҡлы булыр, тип уйлайым. Һүҙ - Гөлдәр ИШҠЫУАТОВАға:**

# НИМӘ ТИП ЙЫРЛАҺАҢ...

## шул тормошоңда бойомға аша



### Һаман да баламын

Беҙҙең ғаилә тормошо шул тиклем күңелле булды, атайым да, әсәйем дә ижад кешеләре түгел, әммә йортобоҙҙа һәр ваҡыт ижади мөхит булды. Һәр ваҡыт театрға, киноға, Магнитогорск ҡалаһына циркка йөрөй торғайныҡ. Гәзит-журналдарҙы күп алдырҙыҡ. Атайым менән әсәйем сәйәси, мәҙәни яңылыҡтар менән ҡыҙыҡһынып бара, донъя йәки ил яңылыҡтарын ишеткәндән һуң икәүләп фекерҙәре менән уртаҡлаша инеләр. Әсәйем иҫ киткес әүҙем кеше, шуға ла минең ижадымды унан да яҡшыраҡ аңлаған, терәк-таяныс булған, баһалай белгән кеше юҡ. Ижад емештәремде иң беренсе ул ҡарап сыға, баһалай, тикшерә. Әсәйемә күпме генә рәхмәт һүҙҙәре әйтһәм дә, аҙ булыр. Бөгөнгө көндә ул минә балаларымды ҡарарға ярҙам итә. Балаларым да ҡул аҫтына инә башланы инде. Эштән арып ҡайтыуға уларҙың сәй ҡуйып, һыуыҫҡыстан өҫтәлгә ризыҡтар теҙеп, әсәкәйем ҡайтты, тип йүгереп йөрөүҙәрен күреү менән бөтә арыуҙарым ҡул менән һыпырып алғандай юҡ була. Бәпестәремдең йылмайыуы тауҙар аҡтарырлыҡ көс бирә. Уларҙы киләсәктә халҡыбыҙға кәрәкле, илебеҙгә файҙа килтерерлек белгестәр итеп күрәм. Өсөнөнөң дә моңо бар, йырларға яраталар, өлкән улымдың шиғыр яҙыу һәләте асылды, ҡыҙым бейеүгә әүәҫ, шулай ҙа сәхнәгә артыҡ мөхәббәт уятмаҫҡа тырышам, сөнки уларҙың артист һөнәрен һайлауын теләмәйем. Шуға күрә хәҙерҙән: "Улым, һин ҙурайғас олигарх, ә һин, ҡыҙым, илдә иң яҡшы иҡтисадсы йәки хоҡуҡ белгесе буласаҡһың", - тип әйтәм. Ә иң бәләкәсемдең әле үк киләсәктә врач буласағы күренеп тора: шул тиклем үләндәр, үҫемлектәр, бөжәктәр менән ҡыҙыҡһына, кешеләргә хәстәрлеке һәм иғтибарлы.

Башҡорт теле иң моңло һәм яғымлы телдәрҙең береһе икәнен үҫмер саҡта аңланым. Рус мәктәбендә уҡыным, дуҫтарым менән дә рус телендә аралаша инем, ә өйҙә атай-әсәйем башҡортса өндәшмәһәм, минә яуап бирмәй торғайнылар, шуның өсөн уларға сикһеҙ рәхмәтлемен. Башҡортостандан ситкә сығып, милләттәштәрем менән үҙ телемдә һөйләшкән саҡта, башҡа милләт кешеләренең: "Нисәй матур телдә һөйләшәһегеҙ ул?.. Һөйләшеүегеҙ йыр һымаҡ, әҙерәк тыңлап торорға мөмкинме?.. Һеҙҙең телегеҙ шундай йомшаҡ, тынлауы рәхәт..." - тигәндәрен ишеткән һайын ғорурлығымдан күккә күтәрелеп киткәндәй була инем! Әле балаларыма шул турала һөйләйем дә: "Туған телегеҙҙе белегеҙ, сит илдәрҙә йөрөгәндә кешеләр туҡтап-туҡтап - ҡайһылай матур телдә һөйләшәһегеҙ, тип һоҡланған һайын, мин атай-әсәйемә рәхмәтле булған кеүек, һеҙ ҙә минә рәхмәтле булырһығыҙ, иншалла",- тип өҫтәп ҡуям.

Өс бала әсәһе булһам да, үҙем һаман балалыҡтан сығып бөтә алмайым: улар менән шаярам, әкиәттәр уҡыйым, уйнайым, көләм. Быға тиклем дә эшем балаларға бәйле ине: 13 йыл "Тамыр" студияһында эшләнем. Балалар өсөн йырҙарҙы ла мин нәҡ ошо студияла эшләгән сағымда яҙа башлағайным. Беренсе тапҡыр Луиза Азамат ҡыҙы: "Ололар өсөн йырҙар былай ҙа күп, әйҙә, һин балалар өсөн ижад итеп ҡара", - тигәйне. Ысынлап та, хәҙер балалар өсөн әҫәрҙәр күбәйеп бара, ә бынан ун йыл элек уларҙы табыуы бик ҡыйын ине. Салауат Низаметдинов минә гел генә: "Күптәр балалар өсөн әҫәрҙәрҙе нисек яҙһаң да бара, тип уйлай - был төптә хата фекер. Балалар өсөн иң юғары әҫәрҙәр ижад итергә, тырышып эшләргә кәрәк, сөнки уларҙы алдап булмай. Әгәр әҫәрең матур икән, улар ҡабул итә, әгәр насар икән, баш тартасаҡ", - ти торғайны.

### Дуҫтарға баймын, шөкөр...

Ҡайғыны сит кешеләр ҙә уртаҡлаша ала, ә бына һинең шатлығыңды, ҙур уңыштарыңды көнләшмәй, ихласлап, тик ысын дуҫтар ғына күтәрә. Әле концертыма әҙерләнгән саҡта быға тулыһынса инандым һәм, дуҫтар күп булмай, тиһәләр ҙә, минең дуҫтарым күп икәнлеген тағы ла бер тапҡыр аңланым. Әллә ҡасан уҡ: "Концертыңды эшләһәң, әйт, афиша, билет, саҡырыу ҡағыҙҙарын эшләп бирербеҙ", - тип әйтеп ҡуйған әхирәтем, "Башбланкиздат"тың етәксеһе Гөлсәсәк Әлибаеванан башлап, концерт алдынан, бер төн эсендә йырға аранжировка эшләп, Нижнекамскиҙан интернет аша ебәргән Артур Таһиров дуҫыма тиклем - кем генә нимә менән генә ярҙам итмәне. Берәүҙәр шиғыр яҙа, күлдәк тегә, реклама яһай, икенселәр көй яҙа, сценарий тыуҙыра, билет тарата, бейеү һала - теҙеп китһәң, гәзитең бите лә етмәҫ!

Һәр проектҡа тотонғанда үҙенә ниндәйҙер яңы асыштар яһайһың, яңы таныштар, дуҫтар барлыҡҡа килә. Был концертты "Ҡурай" телеканалы менән атҡарҙыҡ. "Ҡурай"ҙың продюсеры Илдар Ишкинин шәп администратор ғына түгел, төплө фекерле, тыныс кеше булараҡ, күп әйбергә ҡарашты үҙгәртеп, ойоштороу ваҡытында яңы ысулдар ҡулланып, әҙерлек барышында туҡтап-туҡтап үҙенсәлекле һығымталар яһарға булышлыҡ итте.

Башҡортостанда ике генә милли музыкаль телеканал бар: "Туған тел" һәм "Ҡурай" каналдары. "Туған тел" каналы һәм "Моң" студияһының директоры Флүр Зәбәйеровҡа дуҫтарса: "Каналыңда минең концерттың рекламаһын ҡуйғанда шәп булыр ине", - тигәс, бер ҙә: "Һинең концертыңды беҙҙең конкурент "Ҡурай" каналы эшләй", - тип торманы, бер һүҙһеҙ көн дә рекламаны әйләндерҙе. Шәхси амбицияларынан дуҫлыҡ төшөнсәһен өҫтөн ҡуйған дуҫтар менән ғорурланырға ғына ҡала.

### Эшемдән ҡәнәғәт булһындар

БСТ каналында "Туған моңдар" тапшырыуы ябылғас, "Ҡурай" каналы етәксеһе Айгөл Әхмәҙиева ошо уҡ тапшырыуҙы үҙ каналында дауам итергә тәҡдим итте. Тапшырыуымды матур йырҙар, уйын-көлкө менән биҙәп, кешеләргә яҡын итеп эшләргә тырышам. Халҡыбыҙҙа йырламаған һәм йыр яратмаған кеше юҡ: беҙ һыйыр һауғанда ла, бура бурағанда ла, ҡашығаяҡ йыуғанда ла йырлайбыҙ. Иң мөһиме - "Туған моңдар" аша быға тиклем күренмәгән, ишетелмәгән һәләтле милләттәштәремде табып, уларға илһам ҡанаттары ҡуя, күңелдәренә дәрт өҫтәй алһам, үҙемдең тағы ла бер маҡсатымды бойомға ашырҙым, тип әйтә алыр инем.

Әле балалар өсөн башҡорт, рус һәм инглиз телендә башҡарылған йырҙарҙан торған диск өҫтөндә эшләйбеҙ. Нәҡ ошо диск кескәйҙәргә сит телдәрҙе өйрәнеү өсөн бер баҫҡыс буласаҡ, иншалла.

Бәләкәстәр өсөн башҡорт телендә сыҡҡан беренсе караоке дискыһына 60 йыр ингәйне. Был беренсе тәжрибә булды, сөнки быға тиклем балалар өсөн башҡортса караокелар юҡ ине. Етмәһә, ошо бер диск эсендә, быға булмаһанса, бөтә йырҙарҙы ла тәүҙә балалар башҡарыуында, унан инде яҙылып барған һүҙҙәре менән көйҙәрен генә теҙҙек (3-8 йәшлек кескәйҙәр таныш булмаған йырҙың көйөнә һүҙҙәрен уҡый-уҡый йырлап ултыра алмай, тәүҙә йырҙы кемдер башҡарыуында ишетеп ятлаһа, йырлауы еңел була). Шуға күрә, ундай диск эргә-тирә республикалар күләмендә лә беренсе булды. Ул караоке республикабыҙҙың бөтә ауыл районына таралды, уны уҡыусылар ҙа, уҡытыусылар ҙа киң ҡуллана. Был үҙенсәлекле проекттың сығымдары ла бик ҙур булды. Яҡташым Тажетдинов Нур Азамат улы сығымдарҙың бер өлөшөн күтәреште, ҙур рәхмәт уға.

Кеше был гүзәл ергә килгән икән, халҡы, иле өсөн кескәй генә булһа ла файҙалы эш башҡарырға тейеш, тип уйлайым. Әгәр халҡымды, бигерәк тә кескәй дуҫтарымды йырҙарым менән һөйөндөрә алһам, ошо бурысымдың яртыһын үтәнем, тип әйтә алыр инем.

### Йырҙарым - балаларым

Йырҙарымдың һәр береһе үҙ балаларымдай ҡәҙерле, яҡын, айырып ҡына ҡайһыһындыр ныҡыраҡ яратып башҡарам, тип әйтә алмайым.

Йырлай башлаған осорҙа тормоштоң аңын-тоңон белмәй, башыма нимә килә, шуны йырлап тик йөрөгәнмен. Йылдар үткән һайын тормош та, йырҙарҙың һүҙҙәре лә үҙгәрҙе. Шуға иғтибар иттем: баҡтиһәң, нимә тип йырлайһың, шул бойомға аша икән. Кешеләр минең тормошомда ниндәйҙер хәл булған да, шуға арнап йыр яҙған, тип уйлай. Ә ысынында киреһенсә килеп сыға - тәүҙә йыр тыуа, унан инде йырҙағы ваҡиға барлыҡҡа килә... Уйҙар һәм һүҙҙәр матдиләшә, тиҙәр бит, шулайҙыр, күрәһең. Бөгөн халыҡҡа күберәк сағыу, күңелле йырҙарҙы сығара башланым.

Мин үҙемдә шул тиклем бәхетле һанайым. Әлбиттә, абсолют бәхетле кешеләр булмай тиҙәр һәм ундайҙарҙы аҡылға бер төрлөгә тиңләйҙәр, ләкин һәр миҙгелде бәхет тип ҡабул итергә мөмкин. Үҙ бәхетен кеше үҙе яһай, тигән әйтемде элек ҡабул итмәй, тормошта бөтә нәмәне лә Аллаһы Тәғәлә ебәрә, тип уйлай торғайным. Хәҙер был йәһәттән фекерем үҙгәрҙе. Әйе, был ерҙә һәр аҙымыбыҙ Аллаһы Тәғәлә менән бәйле, ләкин беҙгә ебәрелгән һәр ваҡиғаны нисек ҡабул итеү үҙебеҙҙән тора. Бер миҫал: ике йәшлек ҡыҙым Сабиранан биш йәшлек улым Шайморатҡа рәхмәт әйттерә алмайым. Улым:

- Ярай, әсәй, әйтмәһен, кәрәкмәй миңә уның рәхмәте, - ти.

- Нисек инде кәрәкмәй? Әгәр һин уға яҡшылыҡ эшләгәнһең икән, ул әйтергә тейеш.

- Ә нимә эшләтәм мин ул рәхмәтте? Уны бит уйнатып та, уға берәй нәмә һатып алып та булмай.

- Бер рәхмәт мең бәләнән ҡотҡара.

- Нисек?

- Күккә осоп китә лә, һиңә ҡыйын булһа, төшөп ярҙам итә.

- Кисә мин тайып ҡоланым, бер рәхмәт тә ярҙам итмәне!

- Бер ерең дә һынмаған бит, тимәк, ярҙам иткән...

Ике-өс ай самаһы ваҡыт үтте. Шайморат ултырғысҡа баҫып торған ерҙән ҡаты ғына итеп ҡоланы. Минең ҡотом осто, ә ул һикереп торҙо ла: "Ура! Минең бер ерем дә ауыртманы, Сабираның рәхмәте төштө!" - тип, эй ҡыуанды.

Тимәк, уңыштарҙы ғына түгел, абынған-йығылғанды ла "Ура!" тип ҡабул итергә була, ә унан инде йырымда йырлағанса: "Бәләкәс кенә шатлыҡты ҙур күрһә күңелең, ошо үҙе ысынлап та бәхет түгелме?". Бары тик рәхмәтле һәм мөхәббәтле була белергә кәрәк, тип уйлайым. Беҙ тормошто ни тиклем ныҡ яратабыҙ, тормош та беҙҙе шул тиклем ныҡ ярата.

Быны шулай, олатай-өләсәйҙәрем, атайәсәйем биргән тәрбиәгә тоғро булырға: кешенең ҡайғыһын да, шатлығын да үҙ итергә, ихлас, ябай, эскерһеҙ, йомарт булырға тырышам. Шулай ҙа, өләсәйем әйтмешләй, һәр нәмәлә сама белергә кәрәк, сөнки артыҡ беркатлылыҡ, ябайлыҡ ҡайһы саҡта төп башына ла ултырта, тип уйлайым.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Эшенән дә, тормошонан да ҡәнәғәт булa белгән, һәр яңы тыуған көнөнә шатланып, яңы уңыштарға, бәхеткә ынтылып, киләсәгенә ҡыйыу атлаған, үҙенең генә түгел эргә-тирәһендәге кешеләр, халҡы яҙмышы хаҡында уйлаған, хәстәрләгән шундай ҙур йөрәкле кешеләр рәтенә Гөлдәр Ишҡыуатованы ла индерергә булалыр. Эшләгән изгеләктәрен үҙенә әйләнеп ҡайтһын, ижад ҡанаттарың һүрелмәһен!**

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.**

✓ *Яҡын һәм тоғро дуҫтары күп булған кешенең ғүмере оҙон була. Тикшеренеү барышында асыҡланыуынса, кеше ни тиклем күберәк кеше менән аралаша, шул тиклем оҙағыраҡ йәшәй, имеш.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ЙӨҘ ДУҪЫҢ БУЛҺЫН...

## оҙағыраҡ йәшәр өсөн

■ Эш урынында килеп тыуған ҡайһы бер күңелһеҙ хәлдәр күңелегеҙгә борсоу һаламы? Америка тикшеренеүселәре әйтеүенсә, был көсөргәнештән эш өҫтәле янынан китмәй генә ҡотолорға була. Бының өсөн улар өс ысул тәҡдим итә. Беренсеһе - өҫтәл тартмаһында һәр ваҡыт фисташка, кешью, миндаль һәм грек сәтләүеге һалып ҡуйығыҙ. Был төмлекәстәр стресты еңеләйтеү көсөнә эйә. Сәтләүектәр составындағы витаминдар, аминокислоталар һәм антиоксиданттар стресс гормоны кортизол тәьҫирен баҫып, бәхет гормоны - серотонин бүленеп сығыуға ярҙам итә. икенсе ысул - акупунктур массаж. Белгестәр нервыларҙы тынысландырыу өсөн ҡолаҡ япраҡтарына массаж яһарға тәҡдим итә. Массаж мәлендә ҡолаҡта урынлашҡан биологик әүҙем нөктәләргә яһалған баҫым организмдағы бөтә процестарҙы яйға һала, эске органдар эшмәкәрлеге яҡшыра, кәйеф күтәрелә. Бер сынаяҡ ҡара сәй ҙә нервыларҙы тәртипкә килтерергә булышлыҡ итер. Был эсемлектә файҙалы матдәләр һәм антиоксиданттар бик күп. Шуға ла сәй эсеүгә өс-дүрт минут ваҡытығыҙҙы йәлләмәгеҙ.

■ Бөгөн киң танылыу алған 3D-сеанстарға барыһы ла йөрөй алмай, сөнки фильм ҡараған ваҡытта уларҙың башы әйләнә, хатта күңеле болғана. Белгестәр был сирҙе кибер ауырыу тип атай. Бактиһән, кинотеатрҙарҙа бирелгән күҙлектәрҙең линзаһы менән күҙ хәрәкәттәре тура килмәй. Йәғни экрандағы объект кешегә ҡарай хәрәкәт иткән саҡта күҙ алмалары мөйөшө үҙгәрә, ә линзалар - юҡ. Шуға ла кеше экранға ни тиклем яҡыныраҡ ултырһа, шул тиклем тиҙерәк ул үҙен насарыраҡ тоя башлауы ихтимал. Япония тикшеренеүселәре әйтеүенсә, эскән кешеләргә, ауырлы ҡатындарға, ололарға, йөҡоһоҙлоҡ менән яфаланыусыларға бындай сеанстар бөтөнләй тыйыла.

■ Британия ғалимдары диетик шоколад уйлап тапҡан. Уны әҙерләү технологияһы бик ябай. Ғалимдар какао майын һыу менән ҡатыштырып, уны май урынына ҡуллана. Иң ғәжәбе шул - диетик шоколад тәме буйынса ғәҙәти шоколадтан бер ҙә ҡалышмай. Тикшеренеүселәр бындай ысул менән әҙерләнгән татлы аҙыҡтар донъяла һимеҙлек кимәлен түбәнәйтергә ярҙам итәсәк, тип белдерә.

■ Америка ғалимдары белдереүенсә, даими рәүештә ҡыҙыл сөгөлдөр йәки сөгөлдөр һуты ҡулланыу мейе эшмәкәрлеген, шулай уҡ ҡан әйләнешен һәм ҡан тамырҙары торошон яҡшырта. Составында һаулыҡ өсөн файҙалы матдәләре булған өсөн был йәшелсәне диетологтар ҙа юғары баһалай. Ул аш һеңдереүгә ыңғай йоғонто яһай, организмды витаминдар менән байыта. Сөгөлдөрҙән тыш, сельдерей, кәбеҫтә, йәшел салат та ҡан әйләнешенә файҙалы.

■ Яҡын һәм тоғро дуҫтары күп булған кешенең ғүмере оҙон була. Был фактты Американың Юта һәм Яңы Каролина штаты университеттары ғалимдары билдәләгән. Тикшеренеү барышында асыҡланыуынса, кеше ни тиклем күберәк кеше менән аралаша, шул тиклем оҙағыраҡ йәшәй, имеш. Белгестәр әле был феноменды фәнни яҡтан нигеҙләргә ашыҡмай. Шулай ҙа профессор Берт Учино белдереүенсә, социаль әүҙемлек күп яңы эмоциональ тойғолар кисерергә мөмкинлек бирә. Үҙ сиратында, тоғро дуҫтар һәр саҡ ярҙам итергә әҙер, тормош йөгөн дә улар менән күтәреүе еңелерәк.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

**Беҙ умыртҡа бағанаһы тураһында ауыртыу тоя башлағас ҡына иҫкә төшөрәбеҙ. Ә тотош организмдың сәләмәтлеге тап умыртҡа бағанаһы торошона бәйле. Йыш баш ауыртыуы, кесе янбаш өлкәһендә ҡан йөрөшө боҙолоуы, бауыр ауыртыуы умыртҡа бағанаһының ҡайһылыр бүлегендә ниндәйҙер проблема булыуы тураһында белдерә. Дөрөҫөн әйткәндә, был ауырыуҙарҙың барлыҡҡа килеүендә беҙ үҙебеҙ ғәйепле, сөнки әйелеп, башты аҫҡа эйеп йөрөргә, аяҡҡа аяҡты һалып ултырырға, бейек күтәрмәле аяҡ кейеме кейергә ғәҙәтләнгәнбеҙ. Былар барыһы ла дөрөҫ булмаған һын формалашыуына килтерә лә инде. Аҙ хәрәкәтләнеү, көнө буйы бер урында ғына ултырып эшләү ҙә умыртҡа бағанаһына аҙ зыян итмәй.**

# УМЫРТҠА БАҒАНАҺЫ...

## сирҙәр гөлләмәһе тураһында хәбәр ебәреүсе




### Йомшаҡ кресло урынына - туп...

Умыртҡа бағанаһына беҙҙең психологик торошобоҙ ҙа йоғонто яһай. Шуға ла көсөргәнешле урында эшләгән кешеләрҙең ҡалаҡ һөйәктәре араһында, муйында йәки бил тирәһендә ауыртыу барлыҡҡа килә. Был ауыртыу яйлап арҡаға күсә, умыртҡа бағанаһы дискыларының формаһы боҙола, нервылар ҡыҫыла. Табиптар шуға ла ауыртыу барлыҡҡа килгәс тә белгестәргә мөрәжәғәт итергә ҡуша, сөнки бындай сирҙе дауалау өсөн оҙайлы ғына ваҡыт талап ителә.

Умыртҡа бағанаһын сәләмәт килеш һаҡлау өсөн түбәндәге кәңәштәр ярҙам итер. Иң мөһиме, уларҙы иҫкә төшкән саҡта ғына түгел, ә даими ҡабатлап торорға кәрәк.

Өйҙә. Ортопедик матрас һәм яҫтыҡ һатып алығыҙ - улар йоҡлаған саҡта тәнде дөрөҫ тоторға ғына түгел, ә мускулдарҙы ял иттерергә һәм ҡан әйләнешен яҡшыртырға ярҙам итә. Һөҙөмтәлә - яҡшыраҡ йоҡлаясаҡһығыҙ, арҡағыҙ ҙа һау буласаҡ.

Уянғас та бер нисә минут ваҡытығыҙҙы "ялҡау" гимнастикаға бүлегеҙ. Бының өсөн үҙегеҙҙе бесәй итеп хис итегеҙ, яйлап ҡына төрлө яҡҡа һуҙылығыҙ, аяҡ һәм ҡул суҡтарын әйләнтегеҙ, иплән кенә муйын зонаһын һыйпағыҙ. Бер аҙҙан был күнекмәләр ғәҙәткә инеп китҡас тә уяныу - еңелерәк һәм рәхәтерәк, ә тән һыҙылмалыраҡҡа әйләнә.

Эштә. Эштә ваҡыттың күп өлөшөн ултырып үткәрһәгеҙ, дөрөҫ ултырырға өйрәнегеҙ. Бер урында оҙаҡ ултырған ваҡытта беҙ автоматик рәүештә бер аҙ әйелә төшәбеҙ, ә был билгә артыҡ көсөргәнеш бирә. Был баҫымды еңеләйтеү өсөн эсте бер аҙ тартып, иңдәрҙе яҙып, арҡаны төҙ тоторға тырышырға кәрәк. Был позаға күнегә алмайһығыҙмы? Эшкә фитбол алып килегеҙ һәм креслоны алып ташлап, ошо ҙур тупҡа ултырып эшләгеҙ, сөнки туптан ҡолап төшмәҫ өсөн кеше теләһә лә, теләмәһә лә дөрөҫ ултырырға тырыша. Был шарыу, әлбиттә, әммә сәләмәт булырға ынтылһағыҙ, өйҙә булһа ла сит илдәрҙә күптән ҡулланылған был ысул - туп менән шөғөлләнегеҙ.

Һәр сәғәт һайын бүлмәнең мөйөшөнә арҡа менән баҫып, ҡалаҡ һөйәктәрен стенаға тейҙерегеҙ һәм аяҡ остарын иҙәндән айырмай ғына өҫкә һуҙылығыҙ. Әгәр ҙә эштә, кирелһенсә, көнө буйы баҫып тораһығыҙ икән, бер урында ҡатып ҡалмағыҙ, йышыраҡ аяҡтарҙы алыштырып баҫығыҙ, йөрөгөҙ. Бер нисә минутҡа ултырып алырға ла кәрәк. Бынан тыш, лифт менән ҡулланмағыҙ, ә фатирығыҙға йәйәү менегеҙ.

### Һыу - иң яҡшы дауа

Әгәр ҙә фитнес-тренер булып эшләмәйһегеҙ икән, хәрәкәт етмәүен башҡа төрлө юлдар менән тулыландырырға кәрәк буласаҡ. Иң яҡшыһы - спорт менән шөғөлләнеү. Арҡа өсөн фитнестың иң идеаль варианттары - һыуҙа йөҙөү, аквааэробика, йога һәм пилатес.

Һыуҙа йөҙөү һәм аквааэробика. Уларҙың файҙалы тәьҫиренең сере - һыуҙың этәреү көсөндә. Һыу еңеллек тойғоһо бирә, умыртҡа бағанаһына, быуындарға, тарамыштарға көсөргәнеш төшмәй, йөрәхәт алыу ҡурҡынысы ла юҡ. Ә мускулдар һыуҙа бар ҡеүәтенә эшләй. Һыу - ял итеү һәм көсөргәнеште юҡҡа сығарыу өсөн идеаль мөхит һанала, ул кире эмоциялар һәм стресты ла йыуып төшөрөргә һәләтле. Файҙаһы булһын өсөн бындай сараларға аҙнаһына 2-3 сәғәт ваҡыт бүлергә кәрәк.

Массаж. Фитнесҡа яҡшы өҫтәмә. Маҡсатына ҡарап, массаждың төрлө төрҙәре була. Классик һауыҡтырыусы массаж арҡаны "ырыуна ултыртырға" ярҙам итә. Был төрҙә даими эшләү талап ителмәй, йылына ике тапҡыр 10 көнлөк курс алһағыҙ, еткән. Төп шарт - массаж яһаусы квалификациялы булырға тейеш. Стрестарҙан ҡотолоу өсөн экзотик массаж төрҙәре, мәҫәлән, тай массажы, стоунотерапия (йылы таштар менән массаж), йәки файҙалы үләндәр тултырылған мөксайҙар ҡулланып яһалған массаж яҡшы буласаҡ.

Иҫегеҙҙә тотоғоҙ: массаж курстары спорт һәм гимнастиканы алыштыра алмай, мускулдар корсетын һәр ваҡыт формала тоторға кәрәк.

### Китап өҫтөнә һыулы стакан ҡуй ҙа...

Арҡағыҙҙы һәр ваҡыт төҙ тотоғоҙ. Бының өсөн өйҙә башығыҙға ҡалын китап һалып йөрөргә, китап өҫтөнә һыулы стакан ултыртырға ла була. Башҡа еп бәйләп ҡуйылған һәм ул һинең кәүҙәңде гел өҫкә тартып тора, тип уйлау ҙа яҡшы һөҙөмтә бирә, тиҙәр. Әгәр ҙә өйөгөҙҙә турник бар икән, көн һайын турникта аҫылынып торорға мөмкин. Турникта саҡта яйлап ҡына аяғығыҙҙы ла күтәрһәгеҙ - бер юлы пресс мускулдарын нығытырға була.

Бер ҡасан да ауыр әйбер күтәрмәгеҙ. Был бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙарға ҡағыла. Кешенең хәрәкәт-таяныу аппараты байтаҡ ҡына көстө күтәрергә һәләтле булһа ла, бының менән шаярырға ярамай. Остеохондрозды дауалау күпкә ҡыйбатыраҡҡа төшөүе ихтимал икәнен гел иҫегеҙҙә тотоғоҙ. Магазинда тәгәрмәсле махсус кәрзиндәр ҡулланырға өйрәнегеҙ.

Һалмаҡ ҡына итеп баҫып йөрөгөҙ. Табандар килһе аҙымды нисек яһарға, кәүҙәнең торошон нисек үҙгәртергә икәнлеге тураһында баш мейеһенә сигнал бирөп тора. Уңайһыҙ аяҡ кейеме кейеп йөрөү һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән еңелсә генә аҡһау ҙа атлап йөрөшкә, тимәк, умыртҡа бағанаһына йоғонто яһаясаҡ. Табан мускулдарын нығытыу ҙа кәрәк. Бының өсөн аяҡ бармаҡтары менән иҙәндә ятҡан берәй әйберҙе, әйтәйек, яулыҡты өҫкә күтәреү, аяҡтар менән тупмаҡ ағасын әйләнтеү файҙалы. Өйҙә мөмкинлек булғанда ялан аяҡ йөрөргә кәңәш ителә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Умыртҡа бағанаһының именлеге үҙегеҙҙең ҡулда икәнлекте аңланығыҙмы инде? Ҡайҙа һәм ҡайһы ваҡытта булыуығыҙға ҡарамаҫтан, арҡағыҙ өсөн уңайлы шарттар тыуҙырыу мөмкин хәл. Был кәңәштәрҙе даими рәүештә ҡулланғанда ғына уңышҡа өлгәшеп буласағын да онотмағыҙ һәм, әлбиттә, үҙегеҙҙе яратығыҙ. Сәләмәт булығыҙ!**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# БЫЛ ДОНЪЯЛА...

## бер нәмә лә осраҡлы түгел



**Аллаһы Тәғәләнең "Ерҙәге минең урынбаҫарҙарым", тип нарыҡлаған, юлында осраған хәлдәргә, төрлө һүҙҙәргә, тәбиғәт күренештәренә иғтибар итеп, аңы менән анализ яһап, фекерләп, аҡыл менән йәшәһен өсөн яратылған кеше затынан бит беҙ.**

Иртә таңдан тороп, ашыҡ-бошоҡ ашанып эш тип сапҡан, эштән ҡайтҡас, балаларҙы ҡарап, сүпләп бөткөнсөҙ йорт мәшәҡәттәре менән арып йоҡлап киткән йәш кенә ҡатынға, ире аҫылынып үлеп киткәс, тормошо ла ыңғайламаған: "Өйөңдә аят уҡыт, азан ҡысҡырт, үҙең көн дә Ҡөрьән уҡы", - тиһәм дә ваҡыт таба алмай йөрөнө. Ун-ун биш көн тигәндә үҙе лә машинаһы менән аварияға эләгеп, больницаға инеп китте. "Алла бирһә, дауаланып сыҡҡас, мулла саҡырып аят уҡытыу беренсе эшем булыр", - ти хәҙер.

"Дини белем тураһында ҡайҙа уҡырға була?" - тип һорайҙар. Әлбиттә, дини белемде Ҡөрьәндән табырға була. Уны уҡыған һайын тирә-яғың нурлана, меңәр-меңәр фәрештәләр янына килә, ауырыуҙар ҡаса, донъяң ҡот, ризығың бәрәкәт килә.

Ен-шайтандарҙы нисек итеп бер кешенән, бер йорттан ғына түгел, ә тотош бер ауылдан ҡыуыр көскә эйә булған түнгәүер ырыуына ҡараған олатайым Ниязғол хәҙрәттең мөғжизәһен яҙып үтәйем әле.

Әбйәлил районы Ҡырҙас ауылына яҡын урында ен-шайтандарҙың макамы (торлаҡтары) урынлашҡан була. Кешеләрҙең - үҙ тормошо, ендәрҙең - үҙенеке, бер-береһенә ҡамасауламай йәшәй бирәләр. Ләкин ендәр яйлап-яйлап ауыл халҡына ҡаза килтерә башлай. Бола, аҙғынлыҡ, ҡаңғырыш, талаш, бәлә-ҡаза бөтөн ауылды баҫып ала.

Бөтә был хәлден айышын аңлап ҡалған олатайым, Ҡөрьәнен алып, шайтандарҙың макамына бара. Унда үҙен уратып, өшкөрөп, һыҙыҡ һыҙып сыға ла, ҡап уртаһына ултырып, Ҡөрьән аяттары уҡый башлай. Шул ваҡыт ендәр олатай ултырған ергә төрлө-төрлө йырткыс ҡиәфәтендә килә башлайҙар, ләкин улар һыҙыҡ аша үтә алмай, ә олатай уҡый ҙа уҡый. Бер ваҡыт олатайға аҡ һаҡаллы, аҡ сәсле бер ҡарт бабай килә һәм: "Улым, һин беҙҙе торлағыбыҙҙан ҡыума, ни теләһәң, шуны эшләрбеҙ", - тип әйтә. Олатай уҡына-уҡына ҡайтып китә. Әммә иртәнсәк тағы килә. Килеүенә йәйрәп ятҡан бесәнлектәрендә әллә күпме кәбәндәр ҡалҡып ултырған була. Уларҙы бер төн эсендә ендәр ни хикмәт менән сапҡандарҙыр, киптергәндәрҙер, кәбән итеп ҡойоп ҡуйғандарҙыр. Был эш хайран ҡалырлыҡ була. "Ен кеүек эшләй" тигән һүҙ шунан килеп сыҡҡандыр инде.

Ниязғол хәҙрәт бер ни өндәшмәй, урынына барып ултырып, тағы ла Ҡөрьән уҡыуын дауам итә. Теге ҡарт тағы ла килә. Тағыниндәйҙер вәғәҙәләр бирә. Әммә олатай көн дә макамға килеп, Ҡөрьән уҡыуын дауам итә. Ендәр тамам еңелә. Уларҙың макамдарын ташлап, икенсе ергә күсенгәнен, "Һәш-һәш малҡай! Сеү, илама!" тип ҡыҫҡырышып, сарҡылдашып, малдарын ҡыуып, арбалары шығырҙап барғанын бөтә ауыл халҡы ишетә. Ниһайәт, ауыл халҡы тынысланып, малдар ҡазаланыуҙан туҡтап ҡала.

Шуға күрә, Ҡөрьән уҡыуҙы ҡартайған көнгә ҡалдырмай һәм уға енел-елпе ҡарамай, өйҙә көн дә бер нисә аятын булһа ла уҡып торорға кәрәк. Мәҫәлән, Илшат хәҙрәт Хафизи әйткәнсә, "Әнғәм" сүрәһенең (6) тәүге өс аятын ғына уҡығанда Аллаһы Тәғәлә ул кешенең ҡул аҫтына 7000 фәрештә бирер. Улар уны һаҡлап торорҙар, үҙ ғәмәлдәрен ҡиәмәт көнөнә ҡәҙәр яҙып торорҙар. Етенсе ҡат күктән уның янына тимер туҡмаҡлы бер фәрештә килер. Шайтан был сүрәне уҡыусының ҡәлбенә бер нәмә ҡуйырға теләгән һайын, фәрештә шайтанға шул туҡмаҡ менән килтереп һуғыр. Шул арала "Әнғәм" сүрәһен уҡыусы менән шайтан араһында 7000 пәрҙә барлыҡҡа килер. Ҡиәмәт көнөндә Аллаһы Тәғәлә был кешегә: "Эй, Әҙәм балаһы! Минең рәхмәт күләгәһе аҫтында йөрө, йәннәт ағастарының күләгәһенән файҙалан, Кәүҫәрҙән һыу эс! Һин - Минең ҡолом. Мин - һинең Раббың! Бөгөн һиңә ҡаршы ни хисап, ни ғазап булмаҫ!" - тиәсәк.

**Зәлифә ШАКИРОВА.**
**Хәйбулла районы.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ИСМИ ӘҒЗӘМ ДОҒАҺЫ

**Әл-Мүхиийү** - терелтеүсе, йән һәм тереклек биреүсе. Һәр нәмәне юҡтан бар итеүсе. Зәхмәтле кеше "Йәә Мүхиийү" тип ауырыу ағзаларына ҡағылһа, сихәт табыр. Сәхәр ваҡытында мең дә бер мәртәбә был исемде әйтһә, Хаҡ Тәғәлә мәғрифәте менән тергеҙелер.

**Әл-Мүмиитү** - үлтереүсе. Һәр тереклеккә үлем тәғәйенләүсе. Ҡасан теләй һәм кемгә теләй, шуға Ғазраилды (ғәләйһиссәләм) ебәреүсе. Нәфсеһен тыйыу өсөн, дошманынан ҡотолоу өсөн был исемде күп әйткән кешенең мораҙы насип булыр.

**Әл-Хәйиү** - мәңге тере. Уның башланғыс урыны ла, һуңы ла юҡ. Был һүҙҙәрҙе күп әйтеп ғәҙәтләнгән кешенең ғүмере хәүефһеҙ була.

**Әл-Ҡәйүүмү** - бар ғаләмде - ер-күктәрҙе тәртип-низамда тотоусы зат. Был ҡөҙрәттә ул ярҙамсыларға мохтаж түгел. Һәр көн ҡырҡ мәртәбә "Йәә Ҡәйүүмү ләә иләһә иллә әнтә" тиһә, ул кешенең күңеленән ҡараңғылыҡ китеп, мәғрифәт килер.

**Әл-Үәәжидү** - бай, байлығы һис тә кәмемәй. Етешмәүселек, фәҡирлек Уға хас түгел. Ошо исемде күп әйткән кешенең күңел байлығы артыр.

**Әл-Мәәжидү** - изгелекле, үҙ ҡолдарына йомартлыҡ, мәрхәмәтлек ҡылыусы. Был сифаттар менән ул тулы һәм бөйөк. Был исемде даими ҡабатлап торған ҡолона Раббыбыҙ мәрхәмәтен арттырыр.

**Әл-Самәәдү** - ҡаҡшамаҫ, мәңгелек, бер кемгә лә мохтаж түгел. Уға бер кем дә зарар килтерә алмай. Был исемде даими әйтеүсенең бөтә хәжәттәре үтәлер, халыҡ уға мохтаж булыр. Сәхәр ваҡытында сәждә ҡылып, йөҙ ҙә ун биш мәртәбә ошо һүҙҙе әйтһә, дошмандарынан өҫтөн булыр.

**Әл-Үәхиидү** - берҙән-бер. Уға оҡшаш зат юҡ. Был исемде даими әйткәндең халыҡ араһында изге сифаты артыр.

**Әл-Ҡаадиирү** - һәр нәмәгә көсө еткән зат. Һәр нәмәне юҡтан бар итеүсе, барҙан юҡ итергә лә хәленән килеүсе зат. Был исемде даими әйткән кеше маҡсатына ирешер.

**Әл-Муктәәдиирү** - дәһшәтле, һәр нәмә ҡаршында көс һәм ҡеүәткә эйә булған зат. Һуғыш ваҡытында йә ғәйри хәүефкә ошоно уҡыһа, һис бер рәнйеү күрмәҫ.

**Әл-Мүҡәәддәәмү** - теләгән бәндәһен алға сығарыусы, алдан урын биреүсе. Һәр көн һайын был исемде йөҙ мәртәбә ҡабатлаған бәндәһенә алдынғылыҡты бирер.

**Әл-Мүәхиирү** - гонаһтар өсөн шелтә һәм ғазап биреүҙә хөкөмөн кисектереүсе, ашыҡмаусы, был исемде көнөнә йөҙ мәртәбә әйткән кешеһенә Раббыбыҙ рәхмәтен һалыр.

**Әл-Әүүәлү** - әүәле булмайынса, һәр ваҡыт булған зат. Балаһы булмаған кеше, йә бер ғәйебе булһа, "Йәә Әүүәлү" тип мең мәртәбә әйтһә, маҡсатына ирешер.

**Әл-Әәхиирү** - Уның ахыры, һуңы юҡ. Бар мәхлүкәт юҡҡа сыҡҡанда ла Үҙе мәңгегә ҡала. Был исемде күп әйткән бәндәләренең дошмандары көйөнөстә булыр.

**Әҙ-Ҙаһиирү** - билдәле, уңышлылығы һәм булғанлығы күп дәлилдәр менән раҫлана. Уның барлығын һәм бөйөклөгөн һәр кем һиҙә. Был исемде даими ҡабатлаусының күңеләндә һәр ваҡыт Раббыһы булыр.

УҢЫШ ҠАҘАН

# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Нисек итеп ҡараңғылыҡтан яҡтылыҡҡа сығырға?

Был һүҙҙәр индеецтарҙың сейчемы Такапуша тарафынан әйтелгән.

Заманында европалылар индеецтарҙы тыуған ерҙәренән ҡыуһа, ә индеецтар үҙ ерҙәрен яклап, әленән-әле көрәшкә күтәрелһә, бөгөн американдарҙың индеецтарға ҡарашы үҙгәргән. Сөнки Американың аҫаба халҡы аҡ тәнле күскенселәргә ҡарағанда тәбиғәт менән яҡшы мөнәсәбәттә булған. Уларҙың фәлсәфәһе беҙ күҙаллаған цивилизациянан күпкә мәғрифәтлерәк. Индеецтар үҙҙәренең Илаһы тип Бөйөк Рухҡа табына. Һунарсылар ҡәбиләләштәрен туйҙырырлыҡ ҡына ҡош йә хайуан аулай, ағас ҡырҡһалар, урынына яңыһын ултырталар, ерҙе эшкәртәләр, ваҡыты-ваҡыты менән уға ял биреп алалар.

Индеецтар ҡәбиләләре араһында тәбиғәт менән башҡаларға ҡарағанда дуҫырак булғандары ла бар. Шундай ҡәбиләләрҙең башлыҡтарын сейчемдар тип атағандар. Ундайҙарға, мәҫәлән, алконгиндар һәм вампаноагтар ҡараған. Уларҙың сейчемдары халыҡ менән идара иткәндә аҡылы менән айырылып торған, хатта уларҙы Аллаға тиң тип һанағандар.

Роквэй ҡәбиләһенең һуңғы сейчемы булып Такапуша тора. Ул ҡәбиләштәрен яңы күршеләр эргәһендә йәшәү рәүешен үҙгәртергә, дуҫлыкта һәм ихтирамда йәшәү өсөн яңы аҡыл үрҙәрен яуларға, шулай уҡ тотош тәбиғәт һәм тормош менән бер бөтөн булыу өсөн быуаттарҙан-быуаттарға тапшырылған аҡыл хаҡында иҫләргә кәрәклекте хәтерләтеп торған.

Алдағы бүлектәрҙә беҙ Илаһҡа яҡынайыу өсөн мотлаҡ булған ыңғай фекерләүгә нигеҙ биреүсе тәбиғәт тураһында һүҙ йөрөткәйнек, бынығында инде кинерәк пландағы тәбиғәт тураһында һөйләшергә һәм унда Илаһтың ҙур хәреф менән яҙылырға тейешле мөһим аспектын күрергә тырышырбыҙ.

### Йәшәйеш тәбиғәте

Яңы элементар өлөшсә асҡаны өсөн Физика буйынса Нобель премияһын алған бер физик-атомсы наградa тапшырыу тантанаһында: "Мин был өлөшсәнең булыуы тураһында уны әҙләүгә тотоноорҙан алда уҡ уйлана башлағайным", - тип белдергән. Тәүҙә унда фекер тыуған, ошо өлөшсәне күҙаллап, ул уны тапҡан.

Хәҙер ғалимдар аңдың энергияһын тикшерә башлай. Улар уны үлсәй, фокуслай, әммә әлегә тиклем уның ярҙамында ниндәй эштәр башҡарып була икәнлеген танымай. Алға табан әкрен барған ғалимдарҙы әрләмәйек. Уларға фәнни ысул ҡулланырға, барыһын да яҙып барырға, килеп сыҡҡан һөҙөмтәләрҙе матбуғатта баҫтырырға кәрәк. Әгәр быға ныҡынған парадигмаларҙан ситкә тайпылһағыҙ, профессиональ репутацияғыҙ шик аҫтына алынасаҡ, тикшереүең өсөн аҡса буленмәйәсәк, нәшерселәр һеҙҙән йөҙ борасаҡ. Шуға ла күптәр үҙен етди хәүефкә дусар итмәй, ғәҙәттәгесә эшләй бирә.

Әммә беҙ һеҙҙең менән бер генә аҙым яһамайбыҙ. Беҙ Йыһанға ихтирам күрһәтеп, алмашҡа Илаһтың иғтибарын йәлеп итеп, үҙ аңыбыҙҙы Йыһан Аңы менән тоташтырырға, йыһандың энергетик тәбиғәтен танып, беҙ уны яҡтылыҡ, аң, һөйөү энергияһына әйләндерергә теләйбеҙ. Беҙ галактика сиктәренә йүнәлеп, кире ҡайтырбыҙ. Был беҙгә уңыш мөмкинлеген бирер һәм бер тин дә тормаҫ. Бары тик бер нисә минутығыҙ ғына сарыф ителер.

**Роберт СТОУН.**



## 24 ЯНВАРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.10 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Жди меня"
21.00 "Время"
21.30 "Доктор Тырса", 13-я серия
22.20 "Правдивая история. Тегеран-43"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Подпольная империя", 11-я серия. Криминальная драма
00.50 "Большой переполох в маленьком Китае". Боевик
02.50, 03.05 "Доктор Дулиттл-3". Комедия
03.00 Новости

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Прощание с "Песняром". Владимир Мулявин"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршрут милосердия". Сериал
12.50 "Русский шоколад". Сериал
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья", 236-я серия
17.55 "Все к лучшему", 6-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 77-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Пятая группа крови", 14-я, 15-я и 16-я, закл. серии
23.50 "Вести+"
00.10 "Смерть в кино". Детектив
01.45 "Тайна Чингис Хана". Историческая драма
04.00 "Прощание с "Песняром". Владимир Мулявин"
04.25 "Городок"

### НТВ
04.55 "НТВ утром"
08.30 "Таксистка"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Ментовские войны". "За неделю до весны". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Прощай, "Макаров"! "Команда". "Естественный отбор". Криминальный сериал
